ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 февраль (шаҡай)

2016

№8 (686)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ир-егетте...**

ниңә яҡларға һәм йәлләргә?



3,6

**Беренселәр...**

милли көрәштә лә беренсе



5

**Ихтилалдарҙа еңелмәгәнбеҙ, ә еңгәнбеҙ,**

сөнки уларҙа аҫабалыҡҡа хоҡуҡтарыбыҙҙы раҫлатҡанбыҙ



8-9

**"Ҡуян ат, һырлы сана",**

йәки Сөннәтһеҙҙән кәңәш һорама...



12

**ТВ-программа** 14

***Егет бик нык ратҡан ҡыҙын уға кейәүгә сығырға өндәй - йәғни фамилияһын үҙгәртергә, эшен ташлап, уға балалар тыуҙырырға, эштән ҡайтыуын көтөп, ашарына бешереп, өйҙә ултырырға, уның менән бер ерҙән икенсе ергә күсеп йөрөргә... Ҡыҙыҡ, әгәр ҙә егет ҡыҙҙы ратмаһа, унан ниҙәр талап итер ине икән?***

***(Гейбриелл Бартон).***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ир-егеттәребеҙ бөгөн ниндәй юлдар менән мал таба, бол йыя, ғаиләһен аҫрай?

***Илһам ИШДӘУЛӘТОВ, водитель:*** Үткән быуат аҙаҡтарында гөрләп торған леспромхозыбыҙ бөлөп, хужалығы юҡҡа сығып, милкен ҡомһоҙ хәсрәт хужалары урлап, үҙ-ара таратып алып бөтөргәс, ауыл тормошо туҡтап ҡалғандай булды. Урман ҡырҡыусылар, ағас материалдар етештереүселәр, шул иҫәптән мин һәм минең менән диләнкәнән түбәнге склад участкаһына ағас ташыусы шоферҙар эшһеҙ торҙоҡ та ҡалдыҡ. Беҙ эшләгән ағас ташыусы ҡеүәтле "Урал" машиналарын да әлеге хужалыҡты бөлдөрөп, ташлап ҡасыусы етәксе ишараттары ҡайҙалыр "осороп" бөттө. Урмансы ир-егеттәрҙең ҡайһылары - пенсияға, икенселәре ситкә күсеп китеп, бәғзеләре эскегә бирелеп, эшләмәй ята башланы. Быңдай ҡотолғоһоҙ хәлдән албырғап, ни эшләргә белмәйенсә аптыраған мәлдәрҙә мин дә шешәгә ҡул һуҙғыланым. Әмәлгә ҡалғандай, шулай бер Белоретҡа йомош менән барғанымда вахта ысулы менән Себерҙә эшләп йөрөгән әрмеләш дуҫымды осраттым. Водителдәр беҙгә бик кәрәк, тип, ул мине лә үҙе менән эшләгән еренә алып китте лә барҙы. Дуҫыма рәхмәтлемен, бер ҙә үкенмәйем. Ғаиләне ташлап, ер аяғы ер башында эшләп йөрөү, бер яҡтан, еңел түгел, әлбиттә, ләкин һәр ай аша ял биреп торғас, түҙерлек. Өйҙә, ғаиләне уйлап ҡайғырмайым, ҡатыныма ышанам, уңған ул минең кәләш. Мәктәптә лә эшләй, хужалыҡ, мал-тыуар ҙа ҡараулы. Йәй балалар менән бергәләшеп бесән эшләп алабыҙ. Эшемә килгәндә, таныш шөғөл: Сургут янындағы бер ҡасабала шулай уҡ ағас ташыйым. Эш хаҡы һәйбәт, ятағы бар. Етәксебеҙ йүнле кеше, ялға ҡайтҡанда, тиҙерәк кил инде, һиңә өйрәндек бит, тип оҙатып ҡала. Һәм, ғөмүмән, Себер яҡтарында Башҡортостан егеттәренә мөнәсәбәт яҡшы икәнен күрҙем. Башҡорт ирҙәре бит улар - сыҙамлы башҡорт аттары кеүек, эшкә күндәм халыҡ. Төрлө саҡтар була, минең график, тип тормайһың, ҡасан, ҡайҙа ҡушалар, шунда рейсҡа сығып китәһең. Төн уртаһында ҡайтып йығылып, таң һарыһынан торған мәлдәр ҙә йыш була. Риза булып эшләйһең инде, аҡсаһын түләйҙәр бит. Улымды ана шул "оҙон" аҡсаға уҡытып сығарҙым, йорт ремонтланым, машина һатып алдыҡ, әле ҡыҙыма туй үткәрергә йыйынабыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ...*

# ВАТАНДЫ ҺАҠЛАУСЫЛАР...

## һау-сәләмәт, ныҡлы рухлы булырға тейеш!

**Йәмәғәт башланғысында эшләүсе "Беренсе Башҡорт атлы полкы - Любизар" хәрби-тарихи клубыбыҙ менән алға барабыҙ, хәлебеҙҙән килгәнсә яҡшы эштәр эшләйбеҙ, киләсәккә пландар ҡорабыҙ. Пландарыбыҙ халҡыбыҙҙың йолаларын, ир-азаматлыҡ сифаттарын тергеҙеү, йәштәрҙе илһөйәрлек рухында тәрбиәләү кеүек изге эштәр менән тығыҙ бәйле.**



Дауамы 2-се биттә.

12+

✓ *Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ көслө заттар менән тиң йәшәргә ынтылһа ла, бәхетле ғаиләләрҙә ир - баш. Ир балаларыбыҙҙы үҙенең ғәмәлдәре өсөн яуаплылыҡ тойорға өйрәтеп тәрбиәләһәк, һәр ғаилә шулай буласаҡ.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЯУАПЛЫЛЫҠ КӘРӘК ҺӘР ЭШТӘ

***Мөхтәр МОНАСИПОВ, Баймаҡ районы Ярат ауылының "Атайсал" клубы етәксеһе:*** Милләттең киләсәге ҡатын-ҡыҙҙар ҡулында, тиҙәр, әммә был ир-егеттәр иңенән яуаплылыҡты алмай. Көслө заттар үҙҙәре тәү сиратта рухи һәм физик яҡтан камиллыҡҡа ынтылырға, илһөйәр булырға тейеш. "Ватанды яратыу һәм һаҡлау - имандың бер шарты", тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр. Шуға күрә, Тыуған ил алдындағы бурысты үтәүҙе ауыр йөк итеп ҡабул итмәү, әрме хеҙмәтен теләп үтеп ҡайтыу кәрәк. Ир-егеттәр һәр ваҡыт көслө рухлы, иманлы, мәрхәмәтле һәм күркәм холоҡло булһын ине.

Бөтә был һанап үтелгән сифаттар ғаиләлә тәрбиәләнә. "Бала тыуғанда тәбиғи иман менән тыуа, башҡа сифаттар ғаиләлә бирелә", - тип әйтелә бер хәҙистә. Ғаилә башлыҡтары булған ир-егеттәребеҙ ошо турала онотмаһын, балаларын тәүфиҡлы, рухлы, сәләмәт итеп тәрбиәләүгә күберәк иғтибар бүлһен ине. Юғиһә, хәҙерге заманда ауыл ерендә йәшәгән бик күп милләттәштәр ситкә эшкә китеп, аҡса эшләйем, тип, бына ошо хәҡиҡәт тураһында онотоп китә. Балаға тапҡан аҡсаға һатып алынған затлы уйынсыҡтан бигерәк, кәрәк ваҡытта әйтелгән атай һүҙе, атай тәрбиәһе күпкә мөһим.

Тағы бер хәҙистә "Һәр кем үҙ урынында көтөүсе булырға тейеш", тип әйтелә. Тимәк, һәр кеше үҙ урынында эшләргә, үҙенә йөкмәтелгән бурысты теүәл үтәргә, уға тапшырылған мал-мөлкәтте һаҡларға, арттырырға тейеш. Ирҙәргә шул иҫәптән үҙ ғаиләһен ҡарау, ҡатынын һәм балаларын аҫрау бурысы ла йөкмәтелгән. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ көслө заттар менән тиң йәшәргә ынтылһа ла, бәхетле ғаиләләрҙә ир - баш. Ир балаларыбыҙҙы үҙенең ғәмәлдәре өсөн яуаплылыҡ тойорға өйрәтеп тәрбиәләһәк, һәр ғаилә шулай буласаҡ. Яуаплы ир ғаиләһен аҫрау әмәлен дә табыр, балаларының тәрбиәһенә лә тейешле иғтибар бүлер, ҡатынына ла ихтирамлы булыр. Иң мөһиме, ундай кешеләр заман ауырлығына зарланып, үҙен бахыр итеп йәлләтеп йәшәмәҫ, тип уйлайым. Сөнки ҡайһы ваҡытта ниндәйҙер кәртәләрҙе үтеп сығырға ялҡауы килгән иптәштәр бер ҡыл да ҡыбырлатмайынса, саҡ ҡына ла уңышын һынап ҡарамайынса тороп, бөтәһенә зарланырға тотона. Бер нәмә лә эшләп булмай, һәр урында ҡаршылыҡ күрһәтелә, халыҡҡа тын да алдырмайҙар, тип тә ебәрәләр. Ошолай зарланыуҙан һуң нимәлер үҙгәрәсәге бик шикле, уның урынға шым ғына тырышып эшләп, мөмкин тиклем үҙ хәлеңде яҡшыртырға ынтылыу һөҙөмтәле булыуы бар. Шуға күрә, ир-егеттәребеҙгә хәбәр һөйләп түгел, ғәмәлдәре менән алдырып йәшәүҙәрен, яуаплылыҡ тойорға өйрәнеүҙәрен теләйем!

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ир-егеттәребеҙ бөгөн ниндәй юлдар менән мал таба, бол йыя, ғаиләһен аҫрай?

**(Башы 1-се биттә).**

***Кинйәбай АЛЛАҒОЛОВ, кесе эшҡыуар:*** Ауылда эш юҡ, тигәндәренә аптырайым, нимәгә тотонма - эш тулып ята ауылда! Дәрт тә, елкә генә кәрәк. Мин ғаиләм менән ваҡ мал үрсетеүгә тотондом. Кәртәбеҙҙә 50-ләп баш һарыҡ аҫырайбыҙ, Сибайҙан, Магниттан, күрше райондарҙан килеп алалар, ҡала ашханаһы, кафелар менән дә килешеүебеҙ бар. Ураҙа, Ҡорбан байрамдарында айырыуса үтемле була малыбыҙ. Һуйып, итен генә лә, тереләй ҙә алып китәләр. Мал көтмәгән ауыл кешеләре лә иттән өҙөлмәй. Һарыҡ малының бит ите лә, йөнө лә, тиреһе лә үтемле. Хәҙер күп урындарҙа кейеҙ, бейма баҫыу эше тергеҙелде, һарыҡ йөнөнә һорау ҙур, шуға ла көтөп кенә торалар. Тиреһенә лә урын табыла. Бәләкәй генә булһа ла магазин асып ебәрҙек, унда ҡыҙыбыҙ эшләй. Улым тауар ташый, килен менән беҙгә ярҙам итәләр. Шулай күмәкләп эшләгәндә генә эш бара бит ул. Юғиһә, әле бына мәшәҡәтле осор: һарыҡтар бәрәсләй, эш арта. Хужалыҡты балалар менән бергә алып барғас, әллә ни ҡыйынлығы ла һиҙелмәй. Уларға ла ғаилә аҫрарға, балалар уҡытырға кәрәк бит, табышыбыҙ - уртаҡ. Ейән-ейәнсәрҙәр ҙә бәләкәйҙән эшкә өйрәнеп үҫә. Шулай йәшәп ятабыҙ, зарланмайбыҙ.

***Рөстәм ХӘЛИЛОВ, уҡытыусы:*** Баш ҡалабыҙ мәктәптәренең береһендә физкультуранан уҡытам. Бәләкәйҙән спорт менән шөғөлләнеп, республика ярыштарында ҡатнаша башлағайным, спорт мастерлығына кандидат нормаһын да тапшырғайным хатта. Үкенескә, күнекмәләр ваҡытында травма алып, профессиональ спорт менән хушлашырға тура килде. Тыуған яҡтарға ҡайтып, үҙем тамамлаған мәктәбемдә эшләргә лә иҫәп бар ине, тик ауыл мәктәптәре бер-бер артлы ябылып, штат һаны ҡыҫҡартыла башлағас, Өфөлә тороп ҡалдым. Ни тиһәң дә, эш йәһәтенән бында мөмкинлектәр күберәк. Уҡытыусының эш хаҡы ир-егет өсөн әллә ни маҡтанырлыҡ түгел, әлбиттә. Ләкин яйы табылып тора: ошо уҡ мәктәп-тә ауыр атлетика буйынса секция алып барам, киске сәғәттәрҙә иһә фитнес-клубтарҙың береһендә тренер булып эшләйем. Шул уҡ ваҡытта йәшәгән йортобоҙ янындағы балалар баҡсаһында таңғы 5-6-нан тороп, ҡыш буйы ҡар көрәп сығылды. Ипотекаға фатир алғайныҡ, шуны ай һайын түләп барырға ла кәрәк бит. Әлбиттә, ғаиләне матди яҡтан тәьмин итеү ауырлығын ҡатыным елкәһенә лә һалырға тура килә. Ул мәктәптә сит телдән уҡыта, дәрестән һуң репетиторлыҡ менән шөғөлләнә. Бына шулай, күп ғаиләләрҙәге кеүек, тормош йөгөн бергәләп тартабыҙ...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ...

# ВАТАНДЫ ҺАҠЛАУСЫЛАР...

## һау-сәләмәт, ныҡлы рухлы булырға тейеш!



**(Башы 1-се биттә).**

Мәҫәлән, халҡыбыҙҙың традицион спорт төрҙәренән булған башҡорт йәйәһенән атыуҙы, башҡорт йылҡыларынан сабыш аттары тәрбиәләп, ярыштарҙы йышыраҡ ойоштороуҙы алға һөрәбеҙ. Яҡын аралағы пландарыбыҙҙың береһе лә шуға бәйле: Ғафури районының Имәндәш һәм Ташаҫты ауылдары араһындағы Уҡлыҡая тауы итәгендә, шулай уҡ Ҡырмыҫҡалы районында үтәсәк һабантуйҙа йәштәр араһында уҡтан атыу буйынса фестивалдәр уҙғармаҡсыбыҙ.

Быйыл көҙ көнө данлыҡлы 112-се Башҡорт атлы дивизияһы ойошторолоуға 75 йыл була. Ул ҙур дата айҡанлы ла аттарҙы, олатайҙарҙың хәрби кейемдәрен халыҡҡа күрһәтеү йәһәтенән матур саралар ойошторорға ниәтләйбеҙ. Ниәт-хыялдарыбыҙҙың тормошҡа ашыуы хәрби-тарихи клубтың энтузиаст ағзаларының тырышлығына ғына түгел, ә Хөкүмәтебеҙ, төрлө министрлыҡтар, башҡа йәмәғәт ойошмалары менән берҙәм һәм аңлашып эшләүҙән дә тора. Ошо юҫыҡта ла ҡайһы бер уңыштарыбыҙ бар. Ә былай Республика хәрби дан музейы менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Өфөләге башҡа хәрби-тарихи клубтар менән дә хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Ҙур ҡалалар, төбәктәр менән дә аралашып торабыҙ. Сараларҙы күмәкләп ойошторабыҙ. Күмәкләгән - яу ҡайтарған, ти бит халыҡ мәҡәле. Беҙҙең девизыбыҙ шулай: ятып ҡалғансы, атып ҡалайыҡ.

23 февраль - Ватанды һаҡлаусылар көнө уңайынан ир-егеттәргә лә әйтер һүҙем бар. Ватанды һаҡлаусылар һәр ваҡыт һау-сәләмәт, ныҡлы рухлы булырға тейеш. Ватанды һаҡларға кәрәк, уны фәҡәт ир заттары яҡларға тейеш. Тәбиғи һәм Конституцион хоҡуғыбыҙҙан бер ваҡытта ла ваз кисергә ярамай. Шуның өсөн ир-егеттәрҙең, үҫмерҙәрҙең, хеҙмәткә сираттары еткән уландарҙың ҡаҡшамаҫ һау-сәләмәт булыуҙарын, күңелдәре дәрт-дарманға ташып тороуын теләйем.

"Киске Өфө" гәзите тураһында ла бер кәлимә һүҙ әйтәйем әле. Үҙ йөҙө булғанға ла ҡыҙыҡлы, фәһемле, хәтерҙә ҡалырлыҡ был баҫма. Мин уны ныҡ яратып уҡыйым. Ни өсөнмө? Сөнки был гәзиттә халҡыбыҙҙың боронғо тарихы ла, киләсәк яҙмышы ла, бөгөнгө тормошо ла, бүтән мәғлүмәттәр ҙә - ҙур хөрмәт һәм хәстәрлек менән яҙыла. Шулдыр ул - "Киске Өфө"нөң йөҙө, әтнәкәһе. Хәстәрлек, тигәндәй, был гәзиттә ҡөҙрәтле Һүҙ ғәли йәнәптәре менән мөғәмәләлә яуаплылыҡ та, Факт атлы дөрөҫлөк һаҡсыһына ҡарата иғтибар ҙа күҙгә ташланып тора. Рәссам булараҡ, материалды тәрән тойомлаулы һүрәттәр менән байытып бирә белеүҙәрен дә күҙгә эләм. Ғөмүмән, был гәзиттә үҙ эшен белгән хеҙмәткәрҙәр генә эшләүе шикһеҙ. Шәхсән үҙемә "Киске Өфө" шуның менән дә яҡын - уның журналистары менән тығыҙ бәйләнештә йәшәйбеҙ, уны ижад иткән кешеләр менән яҡшы танышмын. Артабан да ҡунаҡтары - күп, әйтер һүҙҙәре тос булһын "Киске Өфө"нөң.

**Илдар ШӘЙӘХМӘТОВ, "Беренсе Башҡорт атлы полкы - Любизар" хәрби-тарихи клубы рәйесе.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Биатлонсылары союзы президенты Александр Кравцов менән осрашты. Осрашыуҙа Александр Кравцов Өфөлә биатлон комплексын тергеҙеү кәрәклеген билдәләне. Яҡтар шулай уҡ Башҡортостан шифаханаларында спортсыларҙы реабилитациялау мәсьәләләрен тикшерҙе. Республика Башлығы спорт һәм дауалаусы туҡланыуҙа йылҡысылыҡ һәм умартасылыҡ продукттарын файҙаланырға тәҡдим итте.

✓ Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы тәҡдим иткән "Коррупцияға ҡаршы эшмәкәрлек тураһында"ғы Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон проектына ҡул ҡуйҙы. Законның ғәмәлдәге редакцияһында федераль һәм төбәк дәүләт хеҙмәткәрҙәренә ҡулланылған тыйыуҙар һәм сикләүҙәр айырыла. Дөйөм алғанда, уларҙың хоҡуҡтары һәм бурыстары бер үк, әммә федераль чиновниктар өсөн "башҡа" тигән графа бар. Унда өҫтәмә сикләүҙәр инә. Шулай итеп, варианттар бөтөрөлә, федераль һәм төбәк чиновниктарына бер үк талаптар ҡуйыла.

✓ Башҡортостанда "Берҙәм Рәсәй" партияһы эсендә алдан тауыш биреүҙе үткәреү буйынса төбәк ойоштороу комитеты эш башланы. Федераль ойоштороу комитеты илдең 84 субъектында төбәк комитеттары рәйестәрен раҫланы. Башҡортостанда ошо вазифаға төбәк бүлексәһе секретары Константин Толкачев тәғәйенләнде. Ойоштороу комитеты Цюрупа урамы, 17 адресы буйынса урынлашасаҡ. Шунда уҡ 15 февралдән алдан тауыш биреүҙә ҡатнашыусыларҙан документтар ҡабул ителә. 2 апрелдән 15 майға тиклем бөтә кандидаттар ҙа дебаттарҙа ҡатнаша башлай.

✓ Быйыл Башҡортостанда сәсеү кампанияһын үткәреү өсөн сығымдар 7,7 миллиард һум тәшкил итәсәк. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов агросәнәғәт комплексының 2015 йылдағы эшмәкәрлегенә, 2016 йылға бурыстарға һәм яҙғы сәсеү эштәренә арналған киңәйтелгән кәңәшмәлә ошо хаҡта хәбәр итте. Башҡортостан Башлығы орлоҡҡа кукуруз үҫтереү агросәнәғәт комплексының өҫтөнлөклө эш йүнәлештәре иҫәбендә булыуын билдәләне. Шулай уҡ ул ашламалар һәм үҫемлектәрҙе һаҡлау саралары исемлеген киңәйтеү кәрәклеген әйтте.

АЛДАНМА!

# АЛМАҠТЫҢ...

## бирмәге бар

**Яңыраҡ бер апайҙың банктан алған кредитын ваҡытында түләй алмайынса, бурыс өҫтөнә тағы ла күңелһеҙерәк ваҡиғаға тарыуын һөйләгәнен ишетергә тура килде. Улына ҡапыл аҡса кәрәк булған да, аптыраған көндән банктан ҡулланыу кредиты алған. Хаҡлы ялда булһа ла, эшләп йөрөгәс, түләүҙәрҙе ваҡытында ҡаплаған, тик эшендә ҡыҫҡартыуға эләккән һәм кредитты бер нисә ай түләй алмаған. "Миңә үҙҙәрен коллектор тип атаған әҙәмдәр шылтыратып, төрлөсә ҡурҡытып йонсота. Кредитымды түләмәйем тимәйем, тик уларҙың банк менән минең арала төҙөлгән килешеүгә ни ҡыҫылышы бар икән?" - тип аптырай ул хәҙер.**



Бөгөнгө замандың өр-яңы һөнәрҙәренең береһе - коллектор тураһында ишеткәс тә күптән түгел Ульяновскиҙа булған хәл иҫкә төшә. Телефондан янап арыгас, коллектор бурысы булған кешенең тәҙрәһенә яндырғыс ҡатнашма - "Молотов коктейле"н ташлап, уның ике йәшлек ейәнен яндырҙы. Шешә йоҡлап ятҡан баланың өҫтөнә төшөп, яндырғыс шыйыҡсанан уның бите, ҡулдары ныҡ зыян күрҙе. Иң мөһиме, был берҙән-бер осраҡ түгел, тип иҫәпләй белгестәр. Күп кеше йә үҙенең хоҡуҡтарын белмәй, йә был турала өндәшмәүҙе хуп күрә. Йәмәғәтселектә ҙур шау-шыу тыуҙырған хәлдә тикшереүҙе иһә Генпрокуратура һәм Тикшереү комитеты етәкселәре үҙенең шәхси контроленә алды. Санкт-Петербург, Ульяновск өлкәһе губернаторҙары коллектор ойошмаларын тыйырға тәҡдим итте, Башҡортостан властары ла уны хупланы.

Атамаһы нисек кенә хәүефле тойолмаһын, коллектор ғәҙәти коммерция ойошмаһы хеҙмәткәре. Ойошманың маҡсаты - килем алыу, йәғни был йәһәттән ул бизнес алып барыуҙың башҡа төрлө формаларынан бөтөнләй айырылмай кеүек. Коллектор агентлыҡтары банктарҙан ваҡытында түләнмәгән кредиттарҙы һатып ала ла, бирәсәкле кешенән бурысын ҡайтарттырып ала. Бынан уларға ниндәй файҙа, тиерһегеҙ. Файҙаһы бар шул, банк бындай кредиттарҙы ҙур ташлама менән һата. Мәҫәлән, әгәр ҙә һеҙ банкҡа проценттары һәм штрафтары менән 100 мең түләргә тейешһегеҙ икән, банк уны, әйтәйек, агентлыҡҡа 30 меңгә бирә. Коллектор 30 мең исраф итә лә, һеҙҙән уны 100 мең итеп ала, шул рәүешле уға 70 мең килем килә. Банктарға ла унайлы: беренсенән, улар кире статистиканан ҡотола, сөнки ваҡытында түләнмәгән кредиттар иҫәбе ҙурыраҡ булған һайын, рейтинг та түбән, яңы кредиттар биреү өсөн реаль аҡса ла аҙыраҡ була. Икенсенән, кредитын коллекторға һатҡас, банкҡа суд тәртибендә бурысты түләттереү кәрәге ҡалмай, тимәк, юристар штаты ҙур булмаһа ла ярай, судҡа дәүләт пошлинаһы түләмәй, шулай уҡ суд приставтары эшен күҙәтергә кәрәкмәй. Иң мөһиме, бындай кредитынан ҡотолоп, банк реаль аҡса ала. Сөнки ҡайһы сакта суд аша ла кредитты түләтеп булмаған осраҡтар була. Һәр хәлдә, ике яҡ өсөн дә унайлы урталыҡ был.

Ә коллекторҙар эшһеҙ ултырмай бөгөн, илдә микрокредит секторы әүҙем үҫешеүе лә уларҙың кеҫәһенә аҡса тамыҙа. Мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәйҙә теркәлеү үткән микрофинанс ойошмалары банктарға ҡарағанда ла күберәк. Шул уҡ ваҡытта, ҙур булмаған күләмдә ссуда биреү хеҙмәте халыҡтың аҙ килемле ҡатламына тәғәйенләнгән. Былай ҙа осоносҡа ялғап йәшәгәндәрҙең бурыстары үҫкәндән-үҫә бара, шул саҡта тап коллектор килеп ишегеҙҙе ҡағасағына ышаныс ҙурая ла инде.

Коллекторҙар менән нисек аралашырға һуң? Иң тәүҙә, үҙеңде тыныс тоторға. Мөмкинлек булһа, һөйләшеүҙе яҙҙырырға кәрәк, был осраҡта улар үҙҙәрен күпкә ягымлыраҡ тотасаҡ. Унан һуң, ул һеҙгә янай башлаһа, был эҙма менән полиция хеҙмәткәрҙәренә мөрәжәғәт итә аласаҡлығыҙ. Шулай уҡ бурыстың суммаһы, ул ниндәй өлөштәрҙән тора (төп бурыстың, штрафтың, комиссиялар суммаһы, кредит менән ҡулланған өсөн проценттар), был сумма ҡайһы ваҡыт өсөн иҫәпләнгән икәнен белешегеҙ. Әгәр ҙә был һорауҙарға яуап бирә алмайҙар икән, ҡыйыу рәүештә: "Бурыс буйынса хәлде яҡшылап белмәй тороп, ни өсөн шылтыратаһығыҙ?" - тип һорай алаһығыҙ. Осрашырға тура килһә, янғыҙығыҙ булмағыҙ, өйөгөҙгә индермәгеҙ. Бындай һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн хоҡуҡи булыуын раҫлауын һорағыҙ. Банкҡа шылтыратып, бурысығыҙҙың кемгә күсеүен белешегеҙ. Әгәр ҙә сумма менән килешмәйһегеҙ икән, суд тәртибендә хәл итергә тәҡдим итегеҙ.

Бөгөнгө көндә коллектор эшмәкәрлеге тураһында ҡанун ҡабул ителмәгән һәм улар башлыса бурысты ҡайтарыуҙы талап итеү хоҡуғын өсөнсө кешегә биреү тураһында килешеү нигеҙендә эшмәкәрлек алып бара. Ҡағиҙә булараҡ, ул кредит килешеүендә ҡарала.

Бурысты суд тәртибендә түләткәндә, сумма коллекторҙар талап иткән һандан күпкә әҙерәк буласаҡ. Улар һеҙҙән законһыҙ комиссияларҙы ла, штрафтарҙы ла түләтә алмай, етмәһә, бурыстың суммаһы фиксацияланып, артабан үҫмәйәсәк.

Шулай ҙа кредит алырға тура килгән һәм уны ваҡытлыса түләй алмайһығыҙ икән, банкҡа мөрәжәғәт итегеҙ. Улар кредиттың ваҡытын оҙайтып, ай һайын түләнә торған сумманы кәметә ала, шулай уҡ кредит каникулдары биреүҙәре лә ихтимал.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Банк хеҙмәткәрҙәре ваҡлап кредит биреү иҡтисадты үҫтерә тип раҫлай ҙа ул, тик халыҡтың кредитты сит ил техникаһы алыуға ҡулланыуын иҫәпкә алғанда, быға ышаныуы ауыр. Әгәр ҙә кредит алыуҙар менән бергә төрлө йүнәлештә эшләгән етештереүсе ойошмалар күбәйеп, халыҡты эш менән тәьмин итеү, уларҙы эш хаҡы үҫһә генә иҡтисадты алға этәрә тип ҡарар инек уға. Әммә әлеге көндәге хәл бары тик банктарға һәм микрофинанс ойошмаларына ғына файҙалы, иҡтисадҡа ул зыян ғына итә: кредит алған граждандар ҡасан да булһа тауарҙар һәм хеҙмәттәр менән ҡулланыуҙан бөтөнләй туҡтай, сөнки бурыс һаҙлығына тулыһынса бата. Алмаҡтың бирмәге бар, тип юҡҡа әйтмәгән халыҡ. Шуға ла коллектор кеүек замандың эшем эйәләре менән осрашырға теләмәһәк, күрәләтә башты кредит элмәгенә тығыуҙан тыйылырға кәрәктер. Ошонан да дөрөҫөрәк кәңәш юҡ.**

Ләйсән ДАЯНОВА.

БӘХӘС ҠОРАМ

# ИР-ЕГЕТТЕ...

## ниңә яҡларға һәм йәлләргә?

**Гәзиттең бер нисә һанында сыҡҡан "Уландар тәрбиәһе тураһында һәм ул турала ғына ла түгел" тигән мәҡәләне ҡыҙыҡһынып уҡып барҙым. Автор Айбулат Ғафаровтың, йәғни атай кешенең, балаларын тәрбиәләү барышындағы уйланыуҙары, күҙәтеүҙәре ине был. Атайҙың улын шундай ескә тойоуы, сикһеҙ һөйөүен тыя белеп, уны дөрөҫ юҫыкта тоторға тырышыуы, рухи аңын ҡайғыртыуы һ.б. һоҡланыу уятмай ҡалдырманы, әммә аптыратманы.**

"Аптыратманы" тигәндә мин ыңғай мәғәнәлә яҙам. Сөнки бөгөн, Аллаға шөкөр, ғаиләһенә етди ҡараған һәм бала тәрбиәләүҙә яуаплылыҡты тигеҙ, хатта уландары өсөн күберәк тә яуап бирергә ынтылған атайҙар быуыны барлыҡҡа килде. Мин был күренештәрҙе үҙ ағайҙарым, ҡустыларым, коллегаларым миҫалында күҙәтәм. Беҙ хәҙер йәш атайҙарҙың урамда коляска менән йөрөүенә, баҡсаға, мәктәптәргә ата-әсәләр йыйылышына килеүенә, балалар байрамдарында ҡатнашыуына өйрәнеп барабыҙ. Бынан ун биш йыл элек балалар баҡсаһы концертында тик әсәйҙәр һәм өләсәйҙәр генә ултырһа, бөгөн унда атайҙарҙың күпләп килеүе ғәҙәтигә әйләнеп бара. Был беҙҙең милләттең, дөрөҫөрәге, беҙҙең милләт ир-егеттәренең, ниһайәт, заманға яраҡлашa, уның талаптарына яуап бирә башлауы, тип ҡарайым мин. Тик барыһы ла түгел, әлбиттә.

"Ир-егеттәрҙе һаҡлайыҡ!" йәки "Ирҙәрҙе ҡәҙерләйек!" тигән лозунгылар барлыҡҡа килде. Нисек итеп һаҡларға һуң уларҙы? Эшләтмәй, һылап-һыйпап түргә һалып ҡуйырғамы? Һуң беҙ бит уларҙы көслө зат тибеҙ! Ни яғы менән көслө һуң улар, улай ҡатын-ҡыҙ яҡлауына мохтаж булғас? Борон-борондан һаҡлауға һәм яҡлауға ер шарындағы бөтә халыҡтарҙа ла ҡатын-ҡыҙ мохтаж булған. Улар атаһы, ағай-ҡустылары, унан ире, унан улдары, бик булмаһа, яҡын ир туғандары ҡанаты аҫтына һыйынып йәшәгән. Әммә заманалар үҙгәреше, цивилизация үҫеше яйлап-яйлап ҡатын-ҡыҙҙы эш аты сүрәтенә еткергән.

Ир-егетте яйы сыҡҡан һайын йәлләргә, алдынан алып эшләргә әҙер тороу күберәк оло быуын ҡатын-ҡыҙҙарында күҙәтелә. Мәҫәлән, әсәйемдә йәки инәйемдә, бик булмаһа, күрше апайҙы ғына алһам да, уларҙың "яҡларға" ынтылған улы эсергә яраҡкан, ялҡауыраҡ, бешмәгәнерәк, йүнһеҙерәк балаһы инде ул. Иманым камил, бөләкәй саҡтарында ла ул шул балаһын күберәк алдына алған. Әсә өсөн бөтә бала ла тигеҙ, тиһәләр ҙә, һәр әсәнең күңелен нығыраҡ һалған бер балаһы була инде ул. Һәм, ғәҙәттә, был ир бала була. Ана шул балаһын һаҡлап һәм яҡлап ғәҙәтләнгән әсәйҙәр, улдарының йүнһеҙлеген нимә менәндер аҡларға тырышыпмы, йыш ҡына "Ирҙәрҙе һаҡлағыҙ, уларға артыҡ талаптар ҡуймағыҙ!" тип ҡабатларға ярата. Мин был хаҡта әсәйем менән аҫыҡтан-аҫыҡ һөйләшкәнем дә бар, икеүҙән-икеү булғанда ул үҙенең гәйебен таный, әммә башҡалар янында, бигерәк тә килендәре йәки башҡа йәш ҡатын-ҡыҙҙар алдында ир-егеттең яҡлаусыһына әйләнә лә ҡуя.

(Дауамы 6-сы биттә).

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Быйыл Башҡортостанда Гастролдәр үҙәге булдырыласаҡ. Ул Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡарамағында эшләйәсәк. Был хаҡта мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова республика Мәҙәниәт министрлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында белдерҙе. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов республика мәҙәниәтен һәм әҙәбиәтен электрон форматта әүҙемерәк пропагандаларға өйрәнергә кәрәклеген билдәләне.

✔ Быйыл Башҡортостанда "Реаль эштәр" партия проектын тормошҡа ашырыу дауам итәсәк. Һайлаусылар наказдарын үтәү өсөн республика ҡаҙнаһынан 150 миллион самаһы аҡса бүленәсәк. Бөгөнгә 900 ғаризаның барыһы ла тиерлек бойомға ашырылған. Проект сиктәрендә муниципалитеттарҙы төҙекләндереү, һыу үткәргестәр төҙөү, ауыл клубтарын һәм мәҙәниәт йорттарын ремонтлау, балалар һәм спорт майҙансыҡтары төҙөү һәм башҡа мәсьәләләр хәл ителде. Проекттың бюджеты яҡынса 220 миллион һум тәшкил иткән.

✔Өфөлә "Ейәү байрағын ҡаршылау" акцияһы башланды. Сара 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 71 йыллығына арналған. Акция үҫеп килеүсе быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләү маҡсатында уҙғарыла. Еңеү байрағын тәүгеләрҙән булып Дим районы ҡабул итте. Дим районында Еңеү символы бер аҙна буласаҡ, артабан ул Ленин, Киров, Совет, Октябрь, Орджоникидзе райондарына тапшырыла. Акция Өфөнөң Калинин районында тамамлана.

✔Өфөләге "Дим-8" биҫтәһендә буласаҡ директор Рәмил Фәйезов һәм биш йәшлек Богдан яңы мәктәпкә тәүге нигеҙ ташы һалды. 825 урынлыҡ дүрт ҡатлы мәктәптә иркен кластар, бассейн, ике спорт залы, 500 урынлыҡ тамаша залы буласаҡ. Уҡыу бинаһы биләмәһендә ҙур стадион барлыҡҡа киләсәк. Башланғыс класс уҡыусылары өсөн айырым инеү урыны булған блок төҙөләсәк. Дәрестәрҙән һуң ял итеү өсөн оҙайтылған көн төркөмдәре өсөн йоҡо бүлмәләре булдырыу ҙа ҡарала.

✔21 февралдә Өфөнөң "Төҙөүсе" стадионында боҙҙағы мотоуҙыш буйынса Европа чемпионаты башлана. Унда һигеҙ илдән - Австрия, Германия, Норвегия, Рәсәй, Финляндия, Швейцария, Швеция һәм Чехиянан спортсылар ҡатнаша.

"Башинформ"дан.

ҠАЛА СОВЕТЫНДА

# ДЕПУТАТТАР...

## отчет бирә



**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко 2012 йылдан 2015 йылғаса эшләнгән эштәренә отчет бирҙе.**

Иң тәүҙә өсөнсө саҡырылыш депутаттарының "Өфө ҡалаһына Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы тигән статус биреү тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыуға һалынған хеҙмәтен телгә алырға һәм баһаларға кәрәктер. Закондар темаһын дауам иткәндә, дүрт йыл ағымында Өфө ҡала Советы БР Ҡоролтайы - Дәүләт Йыйылышы ҡабул итәсәк законадар проектына 13 тапҡыр тәҡдимдәр индерә һәм шуларҙың 7-һе ҡабул ителә.

Былардан тыш, депутаттар корпусы мәҙәни саралар-ҙан да ситтә ҡалмай. Традиция буйынса Аксаков байрамын йыл һайын улар ойоштора һәм һуңғы дүрт йылда был сара ысын мәғәнәһендәге халыҡ байрамына әйләнде. Сара айҡанлы китаптар нәшер ителә, балалар һәм оло-лар араһында конкурстар ойошторола, депутаттар мәктәптәргә асыҡ дәрестәргә йөрөй, ҡаланың Почетлы граждандары исеменә лайыҡ булғандарҙы тәбриҡләй.

Ҡала Советы үткән өс йыл эсендә 132 тапҡыр асыҡ тыңлауҙар үткәргән. Был ултырыштар башлыса ҡаланы тәҙәкләндереү һәм төҙөләш эштәренә арналған. Шулай уҡ ҡала Уставын үҙгәртеү, Өфө бюджеты проекттары, уларҙы үтәү, ерҙәрҙе файҙаланыу кеүек һорауҙар ҙа үҙәккә ҡуйылған. Әйтергә кәрәк, элек был тыңлауҙарҙа килгән кешеләр ситтән күҙәтеүсе хәлендә генә булһа, хәҙер улар был һөйләшеүҙәрҙә туранан-тура ҡатнаша ала.

Депутат эшмәкәрлегенең иң төп йүнәлештәренең береһе, әлбиттә, халыҡты ҡабул итеү, уларҙың шәхси һорауҙарын хәл итеүгә булышлыҡ итеү. Был эш ике яҡтан да сабырлыҡ, ваҡыт һәм көс талап итә. Өсөнсө саҡырылыш арауығында Өфө депутаттары 3074 ҡабул итеүҙә 11992 кеше менән аралашҡан. Тимәк, уларҙың һәр береһенә йылына - 40, хаттар 70-шәр ҡабул итеү тура килеп ҡуя. Был һандар артында, бәхеткә күрә, әллә күпме халыҡтың рәхмәт хаттары, ысын йөрәктән тәбрикләгән һүҙҙәре ята.

Депутаттар тарафынан хәйриә ярҙамы ла йыш ойоштоpола. Был изгелек ҡала буйынса уҙғарылған төрлө спорт ярыштарына, балалар байрамдарына, мәҙәни сараларға, бәйгеләргә ярҙам итеүгә һәм башҡаларға ҡайтып ҡала. Ошо йәһәттән 2015 йыл үтә уңышлы була. Депутаттарҙың матди ярҙамы менән Дим биҫтәһендә балалар баҡсаһы, шахмат клубы, автоҡаласыҡ һәм бер нисә балалар уйын майҙансығы асыла. Былтыр депутаттар хәйриә ярҙамына ғына ла 34 миллион 350 һум аҡса бүлгән.

Перспектива планында һөйләшкән саҡта, депутаттар ҡала Советы эштәре халыҡҡа яҡын һәм аңлайышлы булыуын теләй. Бының өсөн халыҡтан да кәңәштәр, тәҡдимдәр килергә тейеш. Мәҫәлән, Черниковка, Инорс, Шаҡша биҫтәләрендәге шарттарҙы яҡшыртыу өсөн төрлө пландар ҡарала. Шулай уҡ ҡалала туризмды үҫтереү, ҡунаҡтар өсөн тағы ла күберәк һәм ҡыҙыҡлыраҡ күңел асыу, тамаша ҡылыу урындарын булдырыу тураһында ла һүҙ бара. Ҡаланың санитар хәле лә күҙ уңынан ысҡындырылмай. Таҙалыҡ һәм тәртиптең бөтә нәмәнең дә башланғысы икәнлеген онотоpға ярамай, тип иҫәпләй улар.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТАТЛЫ РЕКОРД!

**"Ҡунаҡһарай" алдындағы майҙанда һуңғы ваҡытта ләғәтебеҙгә ингән "сит ил тауарына үҙебеҙҙең алмаш" күренешенең үҙенсәлекле өлгөһөн кәүҙәләндергән сара үткәрелде - Ғашиҡтар көнөндә баш ҡала ҡунаҡтарына ғәҙәттәге "йөрәк"тәр урынына башҡорттарҙың традицион ризығы - сәк-сәк таратылды.**



Был татлы ризыҡты өс смена 10 көн буйы 20 ашнаҡсы әҙерләне. Бының өсөн 750 килограмм он, ете меңдән ашыу йомортҡа, ярты тонна май һәм Бөрйән балы ҡулланылды. Тамаша өмәт итеп килеүселәрҙе майҙан уртаһында йәшел фонға алтынһыу-баллы ҡурай сәскәһе формаһында урынлаштырылған сәк-сәк ҡаршыланы. Билдәле ваҡытта Рәсәйҙең Рекордтар китабы вәкиле сәк-сәктең 1143,5 килограмм булыуын билдәләп, ойоштороусыларға сертификат тапшырҙы. Рекорд раҫлангас, сәк-сәк бүлгеләнеп, махсус ҡаптарҙа тамаша ҡылыусыларға хәйер итеп таратылды.

Әйткәндәй, быға тиклем булған рекорд - бер тонна ауырлығындағы сәк-сәк Ҡаҙандың 1000 йыллығына әҙерләнгән булған.

# ТАШҠЫНҒА ӘҘЕРБЕҘ

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә Граждандарҙы яҡлау идаралығы етәксеһе урынбаҫары Александр Гец белдереүенсә, яҙғы ташҡын осоронда тейешле хеҙмәттәрҙең эшләү планы раҫланған һәм 10 марттан ҡаланың һәм райондарҙың ташҡынға ҡаршы комиссиялары эшләй башлаясаҡ.**

Алдағы йылдарҙағы күҙәтеүҙәргә ярашлы, быйыл да Кооператив яланды, Нижегородканы, Затонды, Кузнецовск затонын һәм Дим районының Романовка ауылы эргәһендәге автомобиль юлын, Ленин районындағы Козарез урамын һыу баҫыу ихтималлығы күҙаллана. Ҡала территорияһында ташҡынға ҡаршы 18 штаб, 12 күҙәтеү посы, 6 мең кешегә иҫәпләнгән 50 ваҡытлыса урынлаштырыу пункты ойоштороу планлаштырыла. Был осорҙа граждандарҙың именлеге һағында 2026 кеше һәм 435 берәмек техника торасаҡ. Һыу кимәле ҡапыл күтәрелгән осраҡта тиҙ ярҙам күрһәтеү маҡсатынан составында 53 кеше, 12 берәмек техника, 22 йөҙөү средстволары булған Эҙләү-ҡотҡарыу отряды һәр саҡ әҙерлек һыҙығында торасаҡ.

1 марттан һыу баҫыу ихтимал булған территорияларҙа йәшәүселәргә иҫкәрмәләр таратыла башлаясаҡ. Ай уртаһынан халыҡты иҫкәртеү системалары тикшереләсәк. Барлығы 104 электр сиренаһы эшләйәсәк, шулай уҡ махсус ҡоролмалар менән йыһазландырылған 23 транспорттың 10 маршруты раҫланасаҡ. 19 төп киң мәғлүмәт сараларында мәғлүмәт биреү ҙә ҡаралған.

# ЙЫЛЫ ҠЫЙЫҠТАРМЫ?

**Бөгөн баш ҡалала инновацион технологиялар ҡулланыу киң ҡолас ала. Улар ҡала хужалығының төрлө тармаҡтарында, шулай уҡ торлаҡ-коммуналь хужалыҡта ла ҡулланыла.**

Әлегә тиклем киң мәғлүмәт сараларында "аҡыллы йорттар", "аҡыллы селтәрҙәр", энергия ресурстарын контролләү һәм иҫәп алыуҙың автоматлаштырылған системалары, инженер структураһы төҙөләшөндә һәм ремонт эштәрендә ҡулланылған заманса материалдар һәм технологиялар һ.б. тураһында даими һөйләнелә килде. Өфө өсөн һуңғы шундай яңылыҡтарҙың береһе булып "йылы иҙән" аналогияһы буйынса эшләнгән "йылы ҡыйыҡ" технологияһын индереү тора. Был системаның төп элементы - үҙкөйләнеш ярҙамында йылынеусы кабелдәр. Улар ҡыйыҡтың аҫҡы өлөшөнә, һыу аҡҡан торбаларға һ.б. урынлаштырылып, боҙҙо һәм ҡарҙы иретә. Система, температура күрһәткестәренә көйләнеп, автоматик рәүештә эшләй һәм электр энергияһын аҙ "ашай". Донъя тәжрибәһе күрһәтеүенсә, былдай технологиялар ҡыйыҡтарҙа ғына түгел, юлдарҙа күпертәр, баҫҡыстарҙа, пандустарҙа, йорттарға инеү урындарында боҙлауыҡтар булмаһын өсөн файҙаланылыуы билдәле. Рәсәйҙә лә былдай тәжрибә юҡ түгел, мәҫәлән, Мәскәүҙә Ҡаҙан, Курск, Ярославль вокзалдары, Ҙур театр, Мәскәү мэрияһы бина-ларының ҡыйығына ошондай системалар ҡуйылған.

# БАШ ҠАЛА ОБРАЗЫ...

**Өфө 2015 йылда уҙған ШОС һәм БРИКС саммиттарының брендбуғын алды. Башҡортостанға халыҡ-ара саралар дизайнын бушлай тапшырыу тураһында Рәсәй Президенты советнигы Антон Кобяков брифингта хәбәр итте.**




"Стилистика башҡорттарҙың милли биҙәктәренә нигеҙләнгән. Традицион биҙәктең һүрәте камиллаштырылды. Был иһә стилгә баҙыҡлыҡ һәм актуаллек өҫтәне. Ул республиканың дәүләт флагы төҫтәренә буялған", - тип билдәләне дизайнерҙар.

"Өфө-2015" ШОС БРИКС офис-төркөмөндә хәбәр итеүҙәренсә, ошо стиль ҡунаҡтарҙың, ҡатнашыусыларҙың һәм журналистарҙың йәшәгән, эшләгән урынын биҙәгәндә ҡулланылды. Өфөнөң художестволы образы донъя кимәлендә танылыу яуланы.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә "Газпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең XI ҡышҡы (өлкәндәр һәм балалар) Спартакиадаһы булып үтте. Спартакиадала илдең төрлө төбәктәренән, шулай уҡ Белоруссия һәм Әрмәнстан республикаларынан "Газпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең бүлендек йәмғиәттәрендә эшләгән хеҙмәткәрҙәр һәм йәш спортсылар ҡатнашты. Аҙна дауамында Өфөнөң нигеҙ спорт объектында алты спорт төрө буйынса 138 комплект миҙал уйнатылды.

✓Илебеҙҙең баш ҡалаһында "Мәскәү һылыуҡайы" конкурсының һайлап алыу туры уҙҙы. Финалға үткән ҡыҙҙарҙың барыһы ла Мәскәүҙең техник юғары уҡыу йорттарында белем ала. Бәйгенең финалы 5 мартта уҙа. Мәскәүҙә башҡорт һылыуҡайҙары конкурсы өсөнсө тапҡыр уҙғарыла. Бәйгене ойоштороусылар - Мәскәүҙәге һәм Санкт-Петербургтағы республикабыҙ студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы һәм Башҡортостандың Мәскәүҙәге Тулы хоҡуҡлы вәкиллеге.

✓Өфөлә рус теле буйынса бушлай курстарҙа "Тоталь диктант" халыҡ-ара акцияһына әҙерлек башлана. Һәр кесаҙна һайын ойоштороласаҡ курстарға теләгән һәр кем йөрөй ала. Дәрестәр М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның 3-сө корпусында үткәрелә. Адресы: Октябрь революцияһы урамы, 3а, 401-се аудитория. Киске сәғәт 7-лә башлана. Быйыл республикала Тоталь диктант 16 апрелдә уҙғарыла.

✓Әбйәлил районында "Банктарҙың мәғлүмәт хәүефһеҙлеге" тип аталған VII Урал форумының пленар ултырышы булды. Урал форумы - финанс мәғлүмәт хәүефһеҙлеге өлкәһендә йылдың төп ваҡиғаһы. Сараға финанс ойошмалары, күҙәтеү һәм көйләү органдарының 350-нән ашыу вәкиле йыйылды. Форумды Рәсәй банкы ярҙамында Рәсәй банктары ассоциацияһы ойошторҙо.

✓2015 йылда Башҡортостан халҡы ваҡлап һатыу магазиндарында 784,5 миллиард һумдан ашыу суммаға тауар һатып алған. Ошо күрһәткес буйынса республика илдә - һигеҙенсе һәм Волга буйы федераль округында беренсе урын биләй. Һуңғы статистикаға ҡарамаҫтан, былтыр халыҡтың реаль килеме биш процентҡа төшкән. Автомобилгә, аудио- һәм видеотехникаға, компьютерға, аяҡ кейеменә, йорт йыһазына һорауҙың кәмеүе күҙәтелгән. Аҙыҡ-түлеккә килгәндә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтары, ит консервалары, он һатыу кәмегән.

*АФАРИН!*

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының "Шоңҡар" спорт комплексында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 84 йыл тулыуға арналған милли көрәш буйынса республика турниры үтте. Күркәм ярышта 135 көрәшсе егет бил һынашты. Уларҙың ете тиҫтәгә яҡыны төрлө номинациялар, урындар менән билдәләнеп, аҡсалата бүләккә лайыҡ булды. Өфөнөң "ФАЭТОН" төҙөлөш компанияһы директоры Илнур Камил улы Ғиниәтуллин булдырған бүләк фонды көрәшселәрҙең ярыш сәмен арттырҙы.**

# БЕРЕНСЕЛӘР...

## милли көрәштә лә беренсе









Бәйгене асып, ваҡиғаның төп хужаһы, ойоштороусыһы Йәлил Динмөхәмәт улы Йосопов йәш спортсыларға ҡомарлы, шул уҡ ваҡытта ғәҙел ярыш, уңыштар теләне. Артабан дәрәжәле һәм абруйлы ҡунаҡтарға - Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Әмир Ишемғолов менән Булат Йомаҙиловҡа һүҙ бирелде. Билдәле йырсы Юнир Һағынбаевтың йырлы күстәнәсе байрамға рух өҫтәне. Артабан иң тәжрибәле көрәшсе егеттәр майҙан уртаһында көрәштең төрлө ысулдарын күҙәләндергән өлгө сығыштары күрһәтте.

Әйткәндәй, бөгөн бер спортсылар ярыш ваҡытында ла көрәшеү өлгөһө итеп баһаланырлыҡ сығыштары менән башҡаларҙан айырылып торҙо. Мәҫәлән, беҙҙә Салауат районы Тирмән ауылында тыуып үҫкән өс бер туған Хажиморатовтарҙың "таҙа" енеүгә өлгәшеүе һоҡландырҙы. Уларҙың атаһы Йомаҙил ағай әйтеүенсә, егеттәрҙе Тирмән ауылында Валерий Мөхәмәҙиев көрәшкә ылыҡтырған. Өлкәндәре бөгөнгә сараға байраҡ сығарыу хоҡуғы алыусы егет Ридан - милли көрәш буйынса Рәсәй чемпионы, ошо гимназия-интернатты былтыр тамамлаған, әле БДУ-ла белем ала. Унан кесерәге Вилдан - Рәсәй чемпионаты призеры, әле ошонда уҡ 9-сы синыфта уҡый. Өсөнсөләре Фидан әле ауылда 6-сы синыфта белем ала, бөгөн ул 2002 йылғылар араһында беренсе урын яуланы. Бәйгелә лә улар айырылып торҙо: Ридан Хажиморатов элекке гимназистар араһындағы ярышта Йәлил ағайҙың улы Салауат Йосоповтан ғына ҡалышып, икенсе урын алһа, Вилдан иһә, уҡыусылар араһында беренселеккә сыҡты. "Барыһы ла тренерға бәйле", - тине Йомаҙил ағай һәм Ридан менән Вилдандың остаҙы Йәлил Динмөхәмәт улын бөйөк тренер тип, ололаны.

Стәрлебаш районы Ҡабыҡҡыуыш ауылынан тренер Илфат Ишембәтов менән таныштыҡ. Уның менән әңгәмәләшкән саҡта бик шәп фекер ишеттек: "Күптәр спортта йәрәхәт алыуҙан шөрләй. Кешенең мускулдары ныҡ булһа, ул бөтөн тәнде тотоп тора, ул саҡта урамда тайып йығылһаң да, хәүеф әҙәйә". Илфат Ишембәтов үҙҙәренә тренерлыҡта ярҙам иткән, бөгөн бер түгел, ике улын ярышҡа алып килгән атай кеше - гер күтәреү буйынса республика чемпионы Йәмил Собханғолов менән таныштыра. Йәмил ағай Илфат ағайҙың фекерен ҡеүәтләп, хатта дөрөҫ итеп гер күтәреү ҙә файҙалы икәнлеген дәлилләй. "Бәләкәй герҙәр күтәреп, арҡаһын, билен нығытҡан балаға ауырлыҡ күтәреү зыян итмәй", - ти Йәмил Собханғолов. Уның ике улы - Нур менән Ирәндек 35 килограмға тиклемгеләр рәтендә көс һынашты. Стәрлебаштарҙың тағы бер шәп тренеры - милли көрәш буйынса Рәсәй чемпионы Илдар Моратов менән әңгәмәләшеп алырға ла форсат тейҙе. Унан беҙ үҙе һымаҡ көслө, еңеүсе булыу серҙәрен һораныҡ. Ул: "Мин 2013 йылда үҙем 80 килограмдан ауырыраҡ сағымда 120 килограмлыҡ егеттәрҙе еңдем. Көрәштә еңер өсөн тәү сиратта был спорттың техникаһын һыу кеүек эсергә, бөтөн мускулдарыңды ла нығытырға, хатта үҙеңде рухи яҡтан да яҡшы әҙерләргә кәрәк. Ә балаларҙы рухландырыуға килгәндә, иң яҡшы "лекция" - ошондай ярыштар. Үҙем бөгөн иртән генә Ҡаҙан ҡалаһында үткән ярыштан ҡайтып төштөм. Балаларҙың ярышын ҡалдырһам, күңел урынында булмаясаҡ бит. Ана, ҡустым көрәшеп йөрөй...", - тине лә, майҙанға көрәшергә сыҡҡан бер туған ҡустыһы, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө башҡорт интернатлицейында 8-се синыфта уҡыусы Раймандың сығышына иғтибарын йүнәлтте. Шул арала Райман дөғөүсеһен еңел генә алып ташланы. Көрәште ағаһы ғына түгел, уларҙың икеһенең дә тренеры, көрәш буйынса ике тапҡыр республика чемпионы Илшат Ҡотлошин да күҙәткән икән.

Был бәйгелә ҡатнашыусыларҙың күбеһе, әлбиттә, 1-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусылары һәм уны тамамлаусылар ине. Бына 10-сы синыф уҡыусыһы Рәмил Мәзитовтың һәм 9-сынан Зариф Сөләймәновтың сығышы тамамланды. Улар икеһе лә үҙ ауырлыҡ категорияһында икенсе урынға сыҡты. Иглин районы Түбәнге Ләмәҙ ауылында тыуып үҫкән Рәмил гимназияға килер алдынан ирекле көрәш, грек-рим көрәше, самбо менән шөғөлләнгән булған. Ә уның дуҫы Зариф, Учалы районы Ҡотой ауылы егете, 1-се синыфтан 7-сегә тиклем дзюдо секцияһына йөрөгән. Ул шиғырҙар уҡырға ярата, тасуири уҡыу конкурстарында ҡатнаша, "Урал батыр" эпосынан ҙур ғына өҙөктө лә яттан белә. Әле гимназияла остазы Йәлил Йосопов ҡарамағында ике йыл көрәш менән шөғөлләнә. "Йәлил ағайға рәхмәт, ике йыл эсендә мине танымаҫлыҡ итеп үҙгәртте лә ҡуйҙы", - ти ул. Был ике егеттең һығымтаһы шул - көрәшкә етди әҙерлек менән килеү хәйерле.

Ярышҡа Силәбенән килеп еткән Йәлил Йосоповтың өлкән улы Марсель менән әңгәмә ваҡытында ул бағыусылар ярҙамының ысын һөҙөмтә бирәсәгенә ышаныс белдерә: "Илнур Ғиниәтуллинға бер әйтеү менән киңәнеп риза булды. Уның улы ла көрәш секцияһына йөрөй, гимназия-интернатта уҡый. Илнур Камил улы элек тә ярҙамға ихлас ине, бөгөнгө ярышта айырыуса ҙур егетлек күрһәтте. Бүләк алып ҡыуанған спортсы баланың, үҙ эшенең һөҙөмтәһен баһалағандарын тойған тренерҙың бәхетле йылмайыуын күреүҙән дә ҙурыраҡ йыуаныс юҡ беҙҙең өсөн", - тине һәм турнирға килгән спортсыларҙың кимәлен юғары баһаланы, ярыштың алда көтөлгән республика, Рәсәй беренселегенә әҙерлек тә булып тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Әйткәндәй, турнирға финанс ярҙам күрһәткән Әбйәлил районы Яйҡар ауылы уҙаманы, "ФАЭТОН" төҙөлөш компанияһы директоры Илнур Камил улы Ғиниәтуллиндан: "Нисек һеҙҙең һымаҡ уңышлы кеше булырға?" - тип кенә һораныҡ. Ул: "Йәштәргә әйтер һүҙем шул - белем алһындар, маҡсатҡа ынтылыусан булһындар, тырышып эшләһендәр", - тип яуапланы.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған киңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Иммунитетты нығытыу

❖ 300 грамм балға 50 грамм ваҡланған әстерхан сәтләүеге, 3 лимон һуты, 100 мл алоэ һуты ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр балғалаҡ ашарға.

❖ 100 грамм инжирға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға. 2 сәғәт төнәткәс һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 100-әр мл эсергә.

❖ Мүк еләге (клюква) сөйе организмды витаминдарға байыта, иммун системаһын "уятып" ебәрәсәк. 1 ҡалаҡ мүк еләген иҙеп, шәкәр һалып, 200 мл ҡайнар һыу йәки ҡара сәй ҡойорға. Был сәй һыуһынды ҡандыра, арыуҙы бөтөрә, кәйефте күтәрә.

❖ Ҡара ҡарағат япрағы сөйе - шулай уҡ файҙалы эсемлек. 2 ус япраҡҡа 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 3 минут төнәтергә. Сынаяҡҡа ҡойоп сыҡҡас, шәкәр йәки бал өҫтәргә. Былай сәй арыуҙы бөтөрә, организмды таҙарта.

❖ 100 грамм фундук сәтләүеген табала ҡыҙҙырырға, һуңынан ваҡларға. Сәтләүеккә ярты литр ҡайнар һөт ҡойорға, бер аҙ һыуынғас 2 ҡалаҡ бал, бер семтем ванилин өҫтәргә. Көн дауамында эсергә.

## Демодекоз

❖ Әрем (полынь) менән еҙ төймә (пижма) сәскәһен йыйып, иҙеп, һары май ҡушырға. Ҡайнап ултырған һыуҙа төнәтмәне бер аҙ тотҡас, ике ҡат марля аша һөҙөргә һәм артабан һыуыҡтыста һаҡларға. Майҙы биттә 1-2 сәғәт тоторға, салфетка менән һөртөп алырға. Бынан һуң сөйәл үләне (чистотел), монар көпшәһе (болиголов), алтын мыйыҡ (золотой ус) үләндәре төнәтмәләренең береһе менән битте йыуырға. Бынан тыш, әрем, еҙ төймә, ҡәнәфер орлоғо онтағын ҡушып болғатып, һәр иртә һайын 1-әр балғалаҡ ашарға һәм сөйәл төнәтмәһе эсеп ҡуйырға. Төнәтмә шулай әҙерләнә: 1 ҡалаҡ үләнгә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә термоста ҡалдырырға. Ошо төнәтмәне иртәнсәк яртышар стакан эсергә кәрәк. Өс аҙна дауалағандан һуң, ике аҙна ял итегеҙ. Ошонан һуң да биткә һыҫҡылар сыға икән, ҡалған майға 5 трихопол таблеткаһы өҫтәп, һөртөргә кәрәк булыр. Мендәр тышын көн һайын алыштырып торорға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *"Ирҙәрҙе һаҡлайыҡ!" тигән көслө затты кәмһеткән лозунгылар күтәреүҙе туҡтатып, "Ир-егеттең дәрәжәһен һанлайыҡ!" тигәнде алға һөрәйек. Ир-егеткә көслө зат итеп ҡараһаҡ, улар - көсһеҙ зат, балалары, ғаиләһе һағында булыр.*

*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# КҮГӘРСЕН

**Башҡорт фольклорында күгәрсен кеше кеүек һөйләшә, кешене лә аңлай. Мифтарҙа батырҙар күгәрсенгә өйләнә ала.**

"Таҙ батыр" әкиәтендә тылсымсы ҡарт йәш егетте ҡоштарға әүерелергә өйрәтә. Яурындарын һелкеп төрлө ҡошҡа, шул иҫәптән күгәрсенгә лә әйләнә егет. "Алатаев" тигән легендала герой ала тайы ярҙамында аҡҡошҡа һәм күгәрсенгә әйләнә, быны өсөн уға бары тик тотош кәүҙәһе менән әйләнергә кәрәк була. "Нөрхәтдин" хикәйәтендә дейеү ҡарттың берҙән-бер улын үҙенә өйрәнсек итеп ала, уны төрлө кирәмәттәргә өйрәтә. Уларҙың араһында күгәрсенгә әйләнеү һөнәре лә була. Был күренеш башҡорттарҙың балаларына мөнәсәбәтендә лә күренә, улар баланы "күгәрсенем", "күгәрсендәрем" тип әйтеп йөрөтә.

Урал-Алтай халыҡтары араһында кешенең күгәрсенгә әүерелеүе тураһындағы сюжеттар йыш осрай. Төрөктәрҙең халыҡ ижадында ир-егеттең күгәрсенгә һәм киреһенсә, күгәрсендең үҫмергә әүерелеүен һүрәтләгән мотивтар бар. Бер риүәйәттә батша ҡыҙы күгәрсендәр батшаһына кейәүгә сыға.

Удэгей халҡының бер легендаһында шундай тарих бәйән ителә: Кунти тигән һунарсы табышын өйөнә алып ҡайтып еткермәй, урманда ашай ҙа ҡуя. Ә өйҙә уны ныҡ асыҡҡан ҡатыны көтә. Ай ҡатынды йәлләп, уны үҙенә ала. Кунти күгәрсенгә әүерелә, көн һайын тайғала уның гөрөлдәүе ишетелә.

Күп кенә халыҡтарҙың мәҙәни йолаларында, шул иҫәптән, башҡорттарҙа ла күгәрсен ҡатын-ҡыҙ образына тиңләшә. Күгәрсен районында йәшәгән ҡыпсаҡтар ышаныуы буйынса, әгәр ҙә егет төшөндә күгәрсен тотһа, иҫ киткес сибәр ҡыҙға өйләнәсәк.

"Аҡбуҙат" эпосында һыу аҫты батшаһының ҡыҙы Нәркәс күгәрсен туны кейеп, күгәрсенгә әүерелә. Һәүбәнгә, үҙен ебәреүен һорап, шулай тип әйтә:

*"Мине алып һин, егет,*
*Һис тә мандый алмаҫһың;*
*Күгәрсен туным кеймәгәс,*
*Мине төндә күрмәҫһең".*

Нәркәстең ахирәттәре лә күгәрсенгә һәм һыуһынан тағы ла кире ҡыҙға әүерелеү һәләтенә эйә.

"Олтан-Солтан" әкиәтендә тылсымсы батша үҙенең өс ҡыҙын өс төрлө күгәрсенгә әйләндерә. "Йылан ҡыҙ менән Вәнүшкә" мифында йылан-ҡыҙ күгәрсенгә әүерелеүен күрәбеҙ. "Караса батыр" риүәйәтендә аҡ күгәрсенгә әйләнгән хан ҡыҙын Ҡараса батыр тоторға тейеш була. Ҡош осоп китергә лә өлгөрмәй, батырҙың дуҫы уны эләктереп тә ала. Күгәрсен шунда уҡ кире ҡыҙға әйләнә. "Тин ярым" тигән шаян йыҙырмала өс күгәрсен ҡауырһындарын ташлап, ҡыҙҙарға әүерелә. "Өс күгәрсен" әкиәтендә тәҙрәнән осоп ингән өс күгәрсен иҙәнгә бәрелеп, ҡыҙ була. "Әрмәнде тун" легендаһында геройҙың ҡатыны күгәрсенгә әйләнә. Ире уны сит илдә бер батшалыҡта эҙләп таба. Өс күгәрсен осоп ингән йортҡа барып инһә, күгәрсендәр тунын сисеп, ҡыҙға әйләнә. Араларында уның ҡатыны ла була. Герой ҡатынының күгәрсен тунын тартып ала ла, кире бирмәй. Улар кире тыуған яҡтарына ҡайтып китәләр.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*БӘХӘС ҠОРАМ*

# ИР-ЕГЕТТЕ...

## ниңә яҡларға һәм йәлләргә?



**(Башы 3-сө биттә).**

Ир-егетте йәлләмәгеҙ, тигәндә мин уны туҡтауһыҙ әрләп ултырыуҙы күҙ уңында тотмайым. Һәр аңлы ҡатын-ҡыҙҙа ағаһын, атаһын йә ирен тәрбиәләргә ынтылыу тойғоһо булырға тейеш. Мәҫәлән, өҫ-башын йыуып кейҙереү, аш-һыу бешереү, таҙалыҡ, тәртип тотоу һ.б. Тик бөгөн үҙе тишек итектә йөрөп тә, яңыһын иренә алырға мәжбүр булған, аҙыҡ өсөн ураған һайын бурыска ингән ҡатындар ҙа аҙ түгел. Сөнки улар шундай эшкинмәгән ирҙе алға ҡуйып, шуны ир итеп йәшәп өйрәнгән. Улар ир кешенең исеме булғас, еткән, унан артыҡты көтөргә кәрәкмәй, тигәнгә күнгән. Нимә бирә ғаиләһенә бындай ир? Бармы уның балаларына, ҡатынына файҙаһы? Әллә зыяны күберәкме?

Ошонда бер танышымдың һөйләгәндәрен бәйән итеп киткем килә. Был бер миҫалда күптәрҙең яҙмышы сағыла. Күп балалы ғаилә, атай тигән кеше ғүмер буйы эскән, һуғышҡан. Әсәй кеше башын баҫып, ҡыйырһытылып, кәмһетелеп, ҡаратырышланып, балаларын үҫтергән. Балаларҙың йүнле бала сағы, тыныс тормошо булмаған, уларҙың һәр береһе иҫ инә башлау менән тыуған йорттан ситкәрәк китеү яйын ҡараған. Хәҙер инде үҙҙәре ҙурайғас, әсәйҙәренән: "Ни өсөн ундай тормошҡа түҙҙең?" - тип һорарға батырсылыҡ иткәндәр. "Һеҙҙе атайһыҙ үҫтермәү өсөн", - әсәйҙәренең ошо яуабы уның йәнен көйҙөргән. "Атайлы" үҫеп, барыбыҙҙың да нервыларыбыҙ ҡаҡшаған, ҡурҡышып, тотлоғошоп бөткәнбеҙ. Матур ғаилә мөнәсәбәттәрен белмәгәс, ғаилә ҡороп йәшәп китеү ҙә ауырлыҡ менән бирелә. Ҡатын-ҡыҙ булараҡ асыла, наҙлана, иргә йылыша белмәйем", - тип әсәнә ул һаман да. "Ирле" булып йәшәү сәбәбенән әсәйҙәре үҙе лә йөрәк менән сирле, алтмышҡа ла етмәҫ борон нервыларҙан аяҡтары атламай аптырата. Һәм нимәгә кәрәк булған был ҡатынына иптәш, балаларына таяныс була алмаған ирҙе баш итеп йәшәтеү? Был осраҡта ҡатын үҙенең ихтыяр көсө булмауын, үҙ аллы була алмауын, көсһөҙлөгән "балаларҙы атайлы итергә теләү" япмаһы артына йәшерә. Ундайҙар "һеҙҙең өсөн түҙҙем" тип әйтергә лә ярата. Асылда, түҙеп йәшәлгән ғүмерҙең, түҙеп йөрөлгән кешенең хаҡы нимәгә торорлоҡ? Сәләмәтлеккәме? Ватылған, кителгән, ҡоршалған балалар күңеленәме? Ул балалар үҫә лә шул уҡ хатаны ҡабатлай. Сөнки улар яҡшыны танымай, күрмәгән. Ундай ғаилә уландары ҡатындарын хөрмәт итә, һанлай белмәй, ҡыҙҙары баҫылған, үҙҙәрен теләһә кемгә ҡорбан итергә әҙер хәлгә еткән була. Шул ҡыҙҙар тағы эскесегә сығып, шундай уҡ ғаилә ҡороп ҡуя.

Тағы ла бер таныш ҡатын, иремдән айырылыуымды әсәйем аңламай, ти. Эскән ирҙән кеше китәме, туҡмамай бит, тип аптырата, ти. Әсә кеше, тимәк, иҫерек ирҙән ауыҙынан сыҡҡанды тыңлауҙы, төндәр буйы "концерттар" ҡарап сығыуҙы, туғандарында ҡунып йөрөүҙе, һәр байрам-йыйындан ҡурҡып тороуҙы ирҙән китеүгә сәбәп булырлыҡ тип һанамай. Һуғыштан һуңғы быуын бит улар, һуғыш утын үтеп, психикаһы ярайһы уҡ таушалған, унан инде эскелеккә бирелгән атайҙарҙан тыуған балалар. Улар ир-егетте илде дошмандан яҡлаусы ысын батырҙар итеп ҡабул иткән. Һәм был ысынлап та шулай булған. Тик ул батырҙар илгә ҡайтып, артыҡ батыр булмаған быуын булдырған. Ул быуын башлыса динһеҙ, аңһыҙ һәм яуапһыҙ тормош алып барған. Бер ветеран әбей, ирем һуғышта үлеп, өс бала менән яҡлаусыһыҙ ҡалғас, нисек булһа ла ир терәге булыр, тип, һуғыштан аяҡһыҙ ҡайтҡан егеткә сыҡтым, тип һөйләй. "Булдымы һуң терәк?" тиһәм: "Булыр! Бер яҡты көн күрһәтмәне", - тип яуаплай. "Ә ниңә уның менән йәшәнегеҙ һуң?" - тиһәм: "Әллә..." - ти. Әлбиттә, был "әлләнең төрлө сәбәптәре, тотоп торған факторҙары ла булғандыр, әммә үҙен ҡорбан итергә теләгән ҡатын-ҡыҙ ҡайһы заманда ла, ҡайҙа ла үҙенән хоҡуҡһыҙ объект яһай ала инде ул.

"Хәҙерге ҡатындар ирҙәрен ҡәҙерләй белмәй", тип хәбәр һөйләргә яратҡан бер апайҙың да яҙмышы иҫемә төшөп тора. Уҡытыусылар ғаиләһе улар, ире лә, ҡатыны ла. Ире гел генә үҙен эсеп туҡмар булған, балалары менән һыуыҡ мунсаларҙа, һарайҙарҙа ҡунып йөрөгән. Ярай, түҙеп йәшәгән, хәҙер олатайөләсәй булғандар. Ҡыҙҙары ирҙәре менән йәшәй алманы, улдары ҡатынына йүнле ир була алмай. Шул апай йыйылыш һайын "Ирҙәрҙе ҡәҙерләй белмәйһегеҙ", тигән гәйепләү ташлай. Быны нисек аңларға? Ул үҙенең эт булып ғүмер итеүен ирҙе ҡәҙерләү, һаҡлау тип уйлаймы икән? Балаларының ғаилә тормошонда унмауының нигеҙе, бәлки, шул аталары намыҫында ла булырға мөмкинлеге хаҡында уйламаймы икән? Һәм ни өсөн ирмен тигән ир бисә яҡлауына мохтаж һуң ул?

Бер командировкала йөрөгәндә поезда тажик әбейе менән тура килдем. Өфөлә бер түгел, дүрт улы йәшәп эшләй икән, шуларҙы күрергә килеп ҡайтып бара. Ҡышҡа йылы әйберҙәр бәйләп алып килдем, тип һөйләй. Аралашыу барышында "Улдарығыҙҙы йәлләмәйһегеҙме?" тип һорайым. "Нишләп, - тип аптырай инәй, - улар барыһы ла һау-сәләмәт, бала саҡтарынан һаулыҡтары яҡшы булды..." "Һуң, сит ерҙә, сит халыҡ араһында, этелеп-төртөлөп, үҙҙәрен үҙҙәре ҡарап, үҙҙәре бешереп йәшәй, икәүһенең ғаиләһе тыуған ерҙә ҡалған, тиһегеҙ", - тип аңлатырға тырышам. Әбей аңламай, улар эшкә шәп, сәләмәттәр, зәғиф булмаған кешене ниңә йәлләргә, ти ҙә ҡуя. Шул ваҡыт мин уларҙа ир-егетте йәлләү уны кәмһетеү икәнде төшөндөм. Тажик ҡатыны ирҙе яҡлаусы һәм табыусы итеп ҡабул итеп өйрәнгән һәм хатта улдарына ла саҡ ҡына булһа ла ташлама яһай алмай.

Бер өлкә гәзитендә чечен яугирының әсәһе менән әңгәмәне уҡып ултырғайным. Унан: "Ниңә һеҙ улығыҙға, һуғышма, һуғышҡа барма, тип әйтмәйһегеҙ, ул бит унда үләсәк", - тип һорайҙар. Әсә: "Ул ерен һәм ҡатын-ҡыҙын һаҡларға тейеш, үлһә лә..."- тип яуаплай.

Былар, әлбиттә, сағыштырыу өсөн генә килтерелгән миҫалдар булды. Ошо урында ғаиләләрен ҡайғыртып, беҙҙең башҡорт егеттәренең дә Себер һәм башҡа тарафтарҙа тир түгеүен онотмайыҡ. Улар араһында ла үҙҙәрен тейешле кимәлдә тота белгән, яуаплы, намыҫлы булғандарының бар икәнен күрә беләйек. Тимәк, теләһәләр, беҙҙекеләр ҙә йәлләтмәй генә үҙен эшләй, үҙенең ғаилә башлығы булыуын йоҙроҡ менән түгел, ә күркәм холҡо менән иҫбатлай ала? Шуның өсөн, "Ирҙәрҙе һаҡлайыҡ!" тигән көслө затты кәмһеткән, түбәнәйткән лозунгылар күтәреүҙе туҡтатып, "Ир-егеттең дәрәжәһен һанлайыҡ!" тигәндә алға һөрәйек. Ир-егеткә - ир-егет, көслө зат итеп ҡараһаҡ, улар, әлбиттә, үҙҙәренең төп вазифаһында - көсһөҙ зат, балалары, ғаиләһе һағында булыр. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, хөрмәтле уҡыусылар?

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

✓ *Совет-Польша һуғышы барышында Мортазиндың бригадаһы 12-се армия составында Киев, Ровно-Дубин һөжүм операцияларында, Ковель, Замостье, Грубешов, Дубно, Изяславль ҡалаларын азат итеүҙә ҡатнаша.*

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



# МУСА МОРТАЗИН АТЛЫЛАРЫНЫҢ...

## ҡыҙыл казактар сафындағы хеҙмәте

**Легендар комбриг Муса Мортазин бригадаһының Польша фронтынан һуңғы яҙмышы тураһында бер ҡайҙа ла яҙылғаны юҡ. Польша менән һуғыш тамамланғас, Мортазиндың атлылары ҡайҙа булған һуң, алыҫ Украина ерендә Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының артабанғы хеҙмәте нисек дауам иткән?**




*8-се (элекке 12-се Башҡорт полкы) кавалерия полкы ветерандары байраҡ менән. Был Муса Мортазиндың Башҡорт кавалерия бригадаһы байрағы булыуы мөмкин. 1923 йыл. РБ Милли архивы фондынан.*

Билдәле булыуынса, 1920 йылдың апрелендә Польша менән һуғыш башланғас, Мортазиндың атлы бригадаһы ашығыс рәүештә Башҡортостандан илдең көнбайышына, Украинаға оҙатыла. Бында уларға Новгород губернаһынан 1-се Башҡорт кавалерия полкы килеп ҡушыла (таратылған Башҡорт кавалерия дивизияһының йыйылма полкы). Башҡорт кавалерия бригадаһы өс полклы ғәскәр булып китә, йәғни уның составына хәҙер инде 1-се, 27-се һәм 28-се полктар инә. Совет-Польша һуғышы барышында Мортазиндың бригадаһы 12-се армия составында Киев, Ровно-Дубин һөжүм операцияларында, Ковель, Замостье, Грубешов, Дубно, Изяславль ҡалаларын азат итеүҙә ҡатнаша. 1920 йылдың көҙөндә Польша менән солох төҙөлгәс, башҡорт атлылары ҡыҙылдар менән бергә С.В. Петлюраның армияһын тар-мар итә.

Илдең көнбайышында һуғыш тамамланғас, күпләп ғәскәр тотоу кәрәге ҡалмай. Ҡыҙыл армия етәкселеге әкренләп уларҙы ҡыҫҡарта башлай. 1920 йылдың декабрендә Башҡорт кавалерия бригадаһы өс полктан ике полкка ҡалдырыла. Элекке 1-се, 27-се, 28-се полктарҙан 1-се һәм 2-се Башҡорт кавалерия полктары ойошторола.

1920 йылдың декабрь аҙағында 12-се армия таратыла, Башҡорт бригадаһы Киев хәрби округы командалығына буйһондорола. 1921 йылдың мартында башҡорт атлылары Петроград Советы исемендәге 12-се сик буйы дивизияһы ҡарамағына күсә. 25 мартта дивизия етәкселеге Башҡорт бригадаһын айырым дүрт башҡорт эскадронына бүлеп (15-се, 16-сы, 17-се һәм 18-се эскадрондар) сик һағы хеҙмәтенә ебәрә. Башҡорт эскадрондары Украина сигендә 1921 йылдың ҡара көҙөнә тиклем тора. *"Первое время появление всадников-башкир на низких степных лошадях и с незнакомой речью вызывало в украинских, а особенно в приграничных селах настороженность. "Откуда еще такие?" спрашивали крестьяне. Вскоре недоверие уступило место дружбе. На нашем участке границы отдельных помещений для казарм не было. Красноармейцы жили с крестьянами в одних хатах, спали в одной комнате, ели за общим столом. Кружки художественной самодеятельности подразделений проводили постановки с местными силами. И часто, воинственный башкирский "Хугарчин"* (народная песня), звучал после задорной украинской песни "Гандзи" на вечерах..."*, - тип яҙа башҡорт ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт иткән Иван Слатин исемле офицер.

1921 йылдың ноябрендә башҡорт эскадрондары сик хеҙмәтенән ҡайтарылып, Червонный (украинса - ҡыҙыл) казактарҙың 1-се атлы корпусы составына индерелә. Корпус командалығы 15-се, 16-сы, 17-се башҡорт эскадрондарынан 12-се Башҡорт полкы ойоштора, ә 18-се эскадрон 7-се полкка ҡушыла. Яңы ойошторолған полктар Червонный казактарҙың 2-се Чернигов дивизияһы составына инә. Ошо осорҙан алып Мортазин атлыларының Червонный казактар сафында хеҙмәте башлана.

Башҡортостан Хөкүмәте алыҫта хеҙмәт иткән милләттәштәр менән һәр ваҡыт бәйләнештә тора. 1922 йылдың августында Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма Комитеты (БашЦИК) 12-се башҡорт полкын шефлыҡҡа ала. Сөнки был полк тулыһынса элекке Мортазин бригадаһының яугирҙарынан тора. 23 август - Башҡорт бригадаһының ҡыҙылдар яғына сыҡҡан көнө - 12-се башҡорт полкы көнө итеп билдәләнә. Полкка БашЦИК исеме бирелә.

Башҡорт кавалерия бригадаһының күрһәткән батырлыҡтарын баһалап, БашЦИК 12-се башҡорт полкына Ҡыҙыл орден байрағы бүләк итә. Байраҡ тапшырыу тантанаһы 1923 йылдың 12 ғинуарында Шепетовка ауылында, полктың торған урынында үтә. БашЦИК бүләген 2-се Червонный казак дивизияһы начальнигы П. Григорьев тапшыра. Байраҡ менән бергә тапшырылған БашЦИК грамотаһында былай тиелә: *"Центральный Исполнительный Комитет Советской Башкирской Социалистической Республики, высоко оценивая подвиги красноармейцев, командного и политического состава 12-го Башкирского полка Червонного Казачества, совершенные им в боях на польском фронте и польско-румынской границе, одержав бесчисленный ряд блестящих побед над врагами трудящихся, от имени Башкирской Социалистической Советской Республики дарит полку Краснoорденское знамя.*

*Башкирский Центральный Исполнительный Комитет Советов надеется, что и в будущем 12-й Башкирский полк Червонного Казачества будет твердо стоять на защите прав пролетариата, завоеваний Октябрьской революции; с честью высоко будет держать Краснoорденское знамя, заслуженное кровью лихих башкирских кавалеристов, в битвах с наймитами капитала и не запятнают его никакими порочащими высокое звание воина-революционера, проступками.*

*Пусть подвиги старых кавалеристов-башкир, участников жестоких битв с врагами трудящихся, ободряют молодых казаков полка, и пусть заслуженное ими Краснoорденское знамя служит символом новых подвигов казаков полка и новых побед над врагами пролетариата".*

1922 йылдың октябрендә 2-се Червонный казак кавдивизияһы ғәскәрҙәре ҡыҫҡартыла. Алты полк урынына дүрт полк тороп ҡала. Ошоноң менән бер рәттән, полктарҙың номерҙары ла үҙгәрә. 12-се Башҡорт полкына 8-се полк исеме бирелә.

Әкренләп оло йәштәге яугирҙар хәрби хеҙмәттән азат ителә. 1922 йылдың көҙөндә 12-се полктан ике йөҙгә яҡын башҡорт яугиры, элекке Мортазин бригадаһы һалдаттары демобилизациялана. Улар урынына полк украиндар менән тулыландырыла. 1924 йылдың апрелендә инде 12-се полкта хеҙмәт иткән башҡорттар бөтәһе лә демобилизациялана. Әммә полктың бер эскадроны башҡорттар өсөн ҡалдырыла. Был эскадрон Башҡортостандан яңы хеҙмәткә алынған башҡорт егеттәре менән тулыландырылып тора. Шулай итеп, башҡорттар алыҫ Украинала хәрби хеҙмәт үтә. 1925 йылда яңы нумерация ала. Хәҙер инде ул Червонный казактарҙың БашЦИК исемендәге 10-сы Верхнеурал кавалерия полкы исемен йөрөтә.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**
**(Дауамы бар).**

*"Күгәрсен", граждандар һуғышы осоронда башҡорт ғәскәрҙәрендә популяр халыҡ йыры. Хәтирәләрҙән күренеүенсә, "Күгәрсен"де 1919 йылда Петроград фронтында Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө яугирҙары ла яратып йырлар булған.*

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Тауҙарҙағы ҡалын ҡара урмандар һәм бейек ҡарағайҙар башҡорттар өсөн бик мөһим булған эштәрҙе һәм промыслаларҙы күрһәтеп тора. Янында күс булып, бал ҡорттары гөжләп тормаған таҙа һәм шыма ҡарағай һирәк булалыр бында. Башҡорттарҙың ҡорт ҡарауы уғата оҫта һәм ҡыҙыҡһындырырлыҡ булһа ла, был турала яҙып тороуы артыҡ булыр. Ошо турала мөмкин булған бөтөн теүәллегендә статский советник Рычков әфәнде тарафынан тасуир ителгән; ә миңә башҡорттар бал менән һыйланырға әүәҫ булған айыуҙарға ҡаршы ҡулланған бер ысул тураһында ғына һөйләргә ҡала.

Башҡа бер һаҡланыу сараларына ҡарамаҫтан, үҙҙәренең солоғона айыу эйәләшкәнен белеп ҡалһалар, улар ҡыҙа тип аталған ябай тоҙаҡ ҡора. Солоҡ ағасы тирәләй ҡаҙыҡтар ҡағып, ситән үрәләр, айыу солоҡ ағасына килеп йөрөгән яҡтан ике аршин киңлегендә тишек ҡалдыралар. Тишектең бер яғынан оҙон буйлы кешенең тубығына етерлек бейеклектәге ҡаҙыҡ ҡағыла, унан бер сажин тирәһендә туралап икенсе ҡаҙыҡ ултыртылып, улар сит ҡаҙ тип йөрөтөлгән арҡыры кәртә менән тоташтырыла. Арҡыры кәртәгә ҡаршы яҡтан ике сажин алыҫлыҡта тағы ла ике ҡаҙыҡ ултыртылып, улар араһына сей ҡараманан йәйә тип аталған ҡолға ҡыҫтырыла, уның осона штау (тышау. - **Ред. иҫк.**) тигән бау (путо) бәйләнә. Тышауға ҡандаҡ тип аталған һаҡ таяҡсығы (сторожок) беркетелә; йәйәне тарттырғас, ул арҡыры кәртәләге киртеккә эләктереп ҡуйыла. Йәйәнең икенсе яғына арҡыры кәртә буйлап уның менән бер оҙонлоҡта булған йыуан уҡ, йәиһә һөңгө киҫәге беркетелә. Һаҡ таяҡсығы осона нәҙек бау тағылып, уның осо тишектең икенсе яғындағы ҡаҙыҡҡа тарттырмайынса ғына, һәленеп торорлоҡ итеп беркетеп ҡуйыла. Бау артыҡ күренеп тормаҫлыҡ булһын өсөн, тишек бер аҙ сыбыҡ-сабыҡ менән ҡаплап ҡуйыла. Өйрәнелгән юлы менән тишек аша солоҡҡа табан үтеп килеүсе айыу сыбыҡ-сабыҡты ла ҡуҙғатып, бауҙы ла эләктереп алып китә; ошоноң һөҙөмтәһендә һаҡ таяҡсығы урынан килеп сыға, ә тарттырылып ҡуйылған йәйә уҡҡа һуғып ебәрә, ул айыуҙың ҡабырғаһына, йәиһә күкрәгенә ҡаҙала: һөҙөмтәлә ул йә ошонда уҡ, йә бер аҙ ситкә китеп йән бирә.

Таулы, урманлы һәм юлһыҙ ерҙәр беҙҙе Ағиҙел йылғаһын ҡалдырып, урау юлдар менән китергә мәжбүр итте. Шулай итеп, беҙ шул уҡ көндө Ағиҙел аша сығырға булдыҡ. Бында бер ниндәй күпер ҙә, йылға аша сығарыусы һал да юҡ ине, беҙ киселүҙән сығырға тейеш булдыҡ. Киселүҙән сығыу әллә ни ауыр эш булмаһа ла, йәй уртаһында Ағиҙелдең шәп ағымлы булыуы тотҡарлыҡ тыуҙырмай ҡалмай: менге ат та ағым һыуға ҡаршы бик ауыр бара. Төрлө ағымдарҙы үтер өсөн таштар теҙмәһе тип йөрөтөлгән һай урындарҙы һайлай белергә кәрәк, ә улар һыу ағымына ҡаршы йә аҫтараҡ, йә өҫтәрәк ята. Ошо шарттар беҙҙе киселүҙә кискә тиклем тотҡарланырға мәжбүр итте; шул саҡта ла беҙ йылға аша бер зыянһыҙ ғына сыға алманыҡ. Инде бына беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа ҙур булмаған урмандар менән биҙәлгән асыҡ дала пәйҙә булды: урыны-урыны менән бейек булмаған тау һырттары күтәрелеп тора, улар, башлыса, урманһыҙ булып, ғәжәп матур үләндәргә бай ине...

**(Дауамы бар).**

# ИХТИЛАЛДАРҘА сөнки уларҙа аҫабалыҡҡа

**Мәхмүт Сәлимов - Рәсәй төбәктәрендә ғүмер итеүсе рухлы милләттәштәребеҙҙең береһе. Хәрби хеҙмәткәр яҙмышы уны Ростов өлкәһендә төпләндерә. Төньяҡ Кавказ хәрби округында хеҙмәт иткән осоронда Осетин-Ингуш низағында, Беренсе Чечня һуғышында ҡатнаша һәм яралана. 2000 йылда сәләмәтлек торошо буйынса подполковник дәрәжәһендә отставкаға сыға. Әлеге көндә Ростов өлкәһе башҡорттары ҡоролтайын етәкләй. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының дүртенсе йыйынына ҡайтҡан ваҡытында Мәхмүт Бакир улы менән әңгәмә ҡорорға насип булды. Һүҙ - редакция ҡунағына.**

## Беҙ - яугир халыҡ

Сызрандә хәрби училищела белем алған атайым Бакир Ишмөхәмәт улы Бөйөк Ватан һуғышында генерал А. Радимцев етәкселегендәге 13-сө гвардия уҡсылар дивизияһында Сталинградты обороналауҙа ҡатнашып, "Ҡыҙыл йондоҙ" орденына, миҙалдарға лайыҡ булып, капитан дәрәжәһендә ҡайта. Ике-өс туған ағайҙарым да - офицерҙар. Тоҡомобоҙҙо тикшерә башлаһаң, күп ир-егеттәребеҙ яҙмышын хәрби хеҙмәткә бағышлаған. Яугирлыҡ беҙҙең ҡанда. Әсәйем Шәмсеҡәмәр Шаярыҫлан ҡыҙы ла һәр саҡ, онотмағыҙ, һеҙ мырҙа нәҫеленән, тип иҫкәртеп тора ине. Ул шулай үҙенең дүрт улында ла данлы тарихы менән ғорурлана белгән ир-егет тәрбиәләргә тырышҡандыр, тим. Бала саҡта, һәр бер малай кеүек, һуғышырға ярата инем, бер сәбәпһеҙгә түгел, ә ғәҙеллек даулап. Һәм һәр саҡ еңеүсе булып сыҡтым. Ошо еңеүсе тойғоһо мине ғүмер буйына оҙата йөрөнө. Ысынлап та, ир-егет батыр булып үҫергә, яратҡан ҡыҙын, ата-әсәһен, өйөн, балаларын яҡлай белергә тейеш. Бәләкәйҙән батыр булһа, ул артабан да бөтөн ерҙә лә батыр буласаҡ. Әлбиттә, был законды һанға һуҡмау тигәнде аңлатмай. Әммә эске - милләт законы ла бар икәнен онотороға ярамай.

Башҡорт халҡының тарихын алып ҡараһаҡ та, бигерәк тә 1798 йылдарҙы, Павел Беренсенең Указынан башлап 1860 йылдарға тиклем башҡорттарҙың бөтөн яҙмышы хәрби хеҙмәткә бағышлана. Феодаль-буржуаз үткәнебеҙ барыбер халыҡ хәтерендә һаҡланып ҡала. Кем булыуыбыҙ, нисек йәшәүебеҙ, кемгә хеҙмәт итеүебеҙ быуындан-быуынға тапшырыла. Башҡорттар хәрби, яугир халыҡ булғаны өсөн дә тәртипле. Хәрби кешеләр бер ваҡытта ла банда булып ойошмай, улар законға буйһона һәм уны үтәй. Әгәр закон улар яғында икән, улар тау аҡтарырға ла әҙер.

Беҙҙең заманда бөтөн малайҙар ҙа летчик булырға хыяллана ине. Шундай хыялдар менән йәшәһәм дә, мине ракетчик булырға күндерҙеләр. Рига юғары хәрби команда-инженер училищеһына уҡырға ингәйнем, шул уҡ йылда уҡыу йорто үҙгәртеп ҡоролоп, факультетыбыҙ Дондағы Ростов ҡалаһына күсерелгәс, Ростов юғары хәрби команда-инженер училищеһын тамамларға тура килде. Һөнәрем - идара итеү һәм контролдең автоматлаштырылған системалары белгесе, йәғни радиоэлектроника буйынса хәрби инженер. Оборона министры бойороғо менән хеҙмәтемде артабан дауам итеү өсөн Себер хәрби округына ебәрелдем.

## "Төньяҡ амурҙары" башында...

Новосибирскиҙа майор дәрәжәһенә тиклем үрләп, Мәскәүгә, В. И. Ленин исемендәге хәрби-сәйәси академияға уҡырға индем. Шунда Бородино алышының реконструкцияһы ваҡиғаларында Өфө пехота полкы яугиры формаһында Рөстәм Искужинды осраттым. Үҙен ялан-бөрйән башҡорто, тип таныштырҙы. "Улай булғас, туғаным, нимәгә Өфө пехота полкы формаһындаһың, башҡорт кейемен кейергә кәрәк", - тинем. Ул ваҡытта Беренсе башҡорт полкының атаман Платов корпусы составында Бородино һуғышында ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәттәр бар һәм беҙ законлы рәүештә үҙебеҙҙең форманы кейеп, башҡорт халҡының тере тарихын күрһәтә ала инек. Һуңынан Рөстәм менән хәбәрләшеп торҙоҡ. 1992 йылда Өфөгә килгән ваҡытта Салауат Хәмиҙуллин һәм башҡа егеттәр менән осрашып, һөйләшеп, "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубын теркәттек. Уның төп бурысы - башҡорт халҡының хәрби тарихын өйрәнеү һәм тергеҙеү ине. Шул уҡ йылда Бородино һуғышының 180 йыллығына арналған ҙур юбилей сараһында тәүге тапҡыр 36 башҡорт ҡатнашып, милләтебеҙ исеменән лайыҡлы сығыш яһаныҡ. Һуңынан был эш бер аҙ һүнеп ҡалды. Илдар Шәйәхмәтовтың энтузиазмы һөҙөмтәһендә эшкә яңы һулыш өрөлдө һәм бына тиҫтә йылдан ашыу инде клуб уңышлы эшләп килә. Хәҙер беҙҙең хәрби-тарихи клуб "Беренсе Башҡорт полкы - Любизар" исемен йөрөтә һәм Өфө, Мәскәү, Санкт-Петербург, Дондағы Ростовта ғына түгел, Германияла, Польшала, Кипрҙа йәшәүсе башҡорттарҙы берләштереп, халыҡ-ара клуб статусына эйә.

## Берләштереүсе тарих

Башҡорт халҡының тарихын һәр ерҙә, һәр саҡ һәм мөмкинлек булған һайын пропагандаларға кәрәк. Үҙеңдең сығышың менән ғорурланыу өсөн тыуған илеңде - Башҡортостаныңды яратырға, атаәсәңде ихтирам итергә, тарихыңды белергә тейешһең. Тыуған илде яратыу, ата-әсәне хөрмәтләү ҡан аша бирелһә, тарихты өйрәнеү өсөн бер аҙ тир түгергә тура киләсәк. Халҡыбыҙ тарихында оялырлыҡ бер нәмә лә юҡ, башыбыҙҙы юғары, ғорур күтәреп йөрөй алабыҙ. Беҙҙең милли геройҙарыбыҙ, милли уйын ҡоралдарыбыҙ, сәнғәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, әҙәбиәтебеҙ гәүһәрҙәре, быуаттар буйына һаҡланып килгән милләтебеҙ һәм иң мөһиме - үҙ еребеҙ бар. Мәҫәлән, Дон казактары беҙҙең айырым республикабыҙ булыуына һоҡлана. Ростовта ойошмабыҙҙы бик йылы ҡабул итәләр, сөнки бығорт халҡының оҙайлы тарихы нигеҙендә башҡорт һәм рус армияһы, 11-се казак ғәскәре араһындағы дуҫлыҡ ята. Улар барыһы бергә уртаҡ йортобоҙ - Рәсәй өсөн һуғышҡан һәм уны яҡлаған. Был - башҡорт халҡының үҙенсәлеге аша тышҡы дошмандарға ҡаршы берлектәге көрәште, дөйөм илебеҙҙе ингә-иң терәп яҡлауҙы пропагандалау ул. Сөнки уртаҡ тарих иһә барлыҡ халыҡтарҙы ла берләштерә. Кешеләр бер-береһенән айырып торған үҙенсәлекте түгел, ә берләштереүсе тарихты күрә икән, был һәр ваҡытта ла ыңғай ҡабул ителә.

## Мәҙәниәтебеҙҙе алға һөрәбеҙ

Бөгөнгө Дондағы Ростовта 200 милләт, шул иҫәптән Кавказдың барлыҡ халҡы вәкилдәре йәшәй. Казактар аҫаба халыҡ булыуға ҡармаҫтан, бында Кавказ менталитеты хөкөм һөрә. Кавказ менталитеты - ул, тәү сиратта, мөнәсәбәттәрҙәге итәғәтлелек, тыйнаҡлыҡ, милләтенә ҡарамаҫтан кешелек дәрәжәһенә ихтирам, тупаҫлыҡты инҡар итеү, үҙ ҡылығың өсөн яуаплылыҡ тойоу. Шуға күрә лә Дондағы Ростовта яғымлы, итәғәтле кешеләр йәшәй, тиер инем.

Ленинград өлкәһе менән сағыштырғанда, Ростов өлкәһендә башҡорттар күберәк. Илгиз Солтанморатовтың тикшеренеүҙәре буйынса, уҙған быуаттың 80-се йылдары аҙағында бында 1438 башҡорт йәшәгән булһа (Ленинград өлкәһендә - 978), бөгөн был һан 1500-гә еткәндер, моғайын. Әлегә ҡала башҡорттарының айырым үҙ ойошмаһы булһа ла, "Яҡташтар" өлкә башҡорт-татар ойошмаһы менән берлектә эшләйбеҙ.

Былтыр көҙөн Ростовта үткәрелгән Башҡорт мәҙәниәте көндәрендә Стәрлетамаҡ филармонияһынан артистар килде. Үҙебеҙ 1812 йылғы ҡоралдарҙан, кейемдәрҙән күргәҙмә әҙерләп, кейенеп, тарихыбыҙҙың бер өлөшө менән таныштырҙыҡ. Халыҡ күп йыйылды, хатта урындар етмәй ҡалды. Ғөмүмән, Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы һуңғы өс-дүрт йылда беҙгә табан йөҙ борҙо, яҙған хаттарыбыҙҙы яуапһыҙ ҡалдырмай, һәр саҡ ижади коллективтарҙы гастролдәргә ебәреп тора. Улар бит беҙҙең күңелде күтәреп кенә китмәй, беҙ бергәләшеп башҡорт халҡының мәҙәниәтен, сәнғәтен пропагандалайбыҙ.

Өфөлә ШОС һәм БРИКС илдәре башлыҡтарының саммиттары үтеүе лә республикаңың имиджын үҫтереүгә ыңғай йоғонто яһаны, уны бөтөн матурлығында ғына түгел, бөтөн ҡеүәтендә күрһәтте. Башҡортостан илебеҙҙә генә түгел, тотош донъяны таң ҡалдырҙы. Хәҙер кеше Төркиәгә, Мысырға йөрөп ялкты, үҙебеҙҙең ил, үҙебеҙҙең тарих менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланы һәм Башҡортостанда ла ҡайҙа барырға, ниҙәр күрергә мөмкин икәнлеге хаҡында белешәләр. Республикабыҙҙа, шөкөр, ҡарар, таныштыр урындар, йәшәргә Европа кимәлендәге ҡунаҡханалар бар. Мин Өфөнөң туристарҙы ылыҡтырырлыҡ ҡалаларҙың береһе булырына ышанам.

## Тикшереләһе тарих күп әле

Тарихыбыҙҙа беҙҙең тарихсылар бөтөнләй иғтибар итмәгән бер мәсьәлә бар - хеҙмәт итеүҙең сират тәртибе. Был тәртип бала тыуғас та башланған. Уның өсөн һәр ауылдың канцелярияһында писарь яңы тыуған малайҙарҙы метрика кенәгәһенә теркәп барған. Хатта бер көндә бер нисә малай тыуһа, кемдең улы алдараҡ теркәлеүен асыҡлау өсөн шыбаға тотошҡандар. Сөнки малайҙарға 17 йәш тулғас, уларҙы хәрби йыйындарға алғандар, ә 20 йәштән беренсе хеҙмәткә саҡырғандар. Мәҫәлән, исемлектәге тәүге 17 йәки 20 кешенән һуң артабан килгәндәрҙең алдына тағы ла берҙән башлап һанай башлағандар. Бының да үҙ сәбәбе бар - полктың өстән бер өлөшө генә йәштәрҙән торған, ҡалғанын олалар тәшкил иткән. Хәрби бурысҡа бындай ҡараш тотош системаны тәшкил итә. Башҡорттар апрелдән ноябргә тиклем линия хеҙмәтендә булған, шулай уҡ Финляндияла һәм Польшала икешәр полктың даими хеҙмәт алып барыуы билдәле. Хәрби бурыс тураһындағы положениеға ярашлы, хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыу, линияларҙа хеҙмәт итеү, оҙайлы походтарҙа булыу тышҡы хеҙмәт тип аталған. Эске хеҙмәт - биш, тышҡы хеҙмәт 22 йыл булған. Тышҡы хеҙмәттән ҡайтҡас, яугир эске хеҙмәт бурыстарын үтәгән: урмандарҙы янғындан һаҡлаған, каторжандарҙы, почта хеҙмәтен оҙатып йөрөгән, кантон идараларында дневальный хеҙмәтен үтәгән һ.б. Кем льготала булған, улар хеҙмәт итеү өсөн үҙенең сиратын көткән.

Башҡорт казактары тураһында һүҙ йөрөткәндә, күптәр был ҡатламға халыҡтың күпмелер өлөшө генә ингән, тип күҙаллай. Ғәмәлдә бөтөн башҡорттар ҙа казак ҡатламына ингән. Мәҫәлән, 1856 йылда дөйөм халыҡ һанынан ир-аттар - 460775, ҡатын-ҡыҙҙар 451073 кеше булһа, шуларҙан 460496 ир-ат, 450936 ҡатын-ҡыҙ хәрби казак ҡатламы иҫәбендә булған. Бында тағы ла асыҡлап китәһе мәлдәр бар, сөнки был иҫәпкә балалар ингәнме, юҡмы икәнлеге билдәһеҙ. Сөнки егеттәр бары тик 20 йәштән генә, ҡыҙҙар кейәүгә сыҡҡас ҡына казаклыҡҡа ингән. Бындай ҡараш ер мәсьәләһе менән ныҡ бәйле булған. Сағыштырыу өсөн Ырымбур казак ғәскәренә 193466 кеше - башҡорт казактарынан 9 тапҡырға, Урал казак ғәскәрҙәренә 72109 кеше - башҡорт казактарынан 11 тапҡырға кәмерәк кеше ингән.

Башҡорт казак ғәскәрендә чиновник балалары өсөн ғәскәр иҫәбенә уҡыу йорттарында (университеттарҙа, медицина-хирургия академияһында, хоҡуҡ белеме училищеларында, урман һәм межалау институтында, тау корпусында, төҙөлөш училищеһында, кадет корпустарында, хәрби училищеларҙа һ.б.) 50 даими вакант урын булдырыла. 1850 йылда ғәскәри уҡыу йорттарында 6555 башҡорт белем ала. Урындарҙағы 313 шәхси мәктәптә башҡорт казактары балалары уҡый.

Ә. Әсфәндийәровтың башҡорттарҙың кантон идаралығы тураһында бәйән иткән китабында яҙылғанса, ул замандағы 10 медицина докторының береһе - Әхмәтйән Әбдәшевтың башҡорт булыуы хаҡында

**✓ Крайҙы өйрәнеүсе Рәсәй Фәндәр академияһы Көньяҡ фәнни үҙәгенең ғилми хеҙмәткәре В. Афанасенко билдәләүенсә, Дебальцевоға тиклем кавалерия дивизияһы 90 процентҡа башҡорттарҙан торған.**

# ЕҢЕЛМӘГӘНБЕҘ, Ә ЕҢГӘНБЕҘ,

## хоҡуҡтарыбыҙҙы раҫлатҡанбыҙ

ла хәҙер күптәр белмәй. 19-сы быуаттың 40-сы йылдарында Башҡортостан ғәскәре территорияһы 4 медицина участкаһына бүленә, бынан тыш, 5 урында йәйге ваҡытлыса госпиталдәр асыла. Уларҙа башҡорт табиптары, фельдшерҙарҙан тыш, кендек инәйҙәре (акушеркалар) лә эшләй. Мәҫәлән, 1864 йылда Санкт-Петербург Бала табыуға ярҙам итеү институтының Кендек инәйҙәре институтын Красноуфимск өйәҙенән Тасимуллина, Минзәлә өйәҙенән Абдулманяфова, Өфө өйәҙенән Абдулъяппарова тамамлай. Башҡорт ҡатындары дүрт йыл акушерлыҡҡа уҡыған. Ни өсөн? Сөнки башҡорттарҙың һаны кәмей башлауы хөкүмәтте борсоуға һала - хәрбиҙәр, ғәскәр һаны кәмей. Шуға күрә кантон системаһының административ хакимиәте булған һәр йорттан (юрта) башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын уҡырға ебәрәләр, улар ҡайтҡас, һәр ҡайныһы тағы ла 10 ҡыҙҙы уҡытырға тейеш була. Һөҙөмтәлә демография тотороҡлана.

1910 йылда ғына Дим буйындағы бер нисә башҡорт ауылы ярты миллион аҡса эшләгән. Нисек? Санкт-Петербургтан, Мәскәүҙән һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан 4800 самаһы кеше килеп, ҡымыҙ менән дауаланған. Шул ваҡытта уҡ был эште теркәп, һанап торғандар, һәр кешенән 100 һум алғандар. Ул ваҡытта һыйыр 3 һум торған. Бер көндә Өфө йәрминкәһендә аукционда тотош Башҡортостан 75 мең ат һатҡан. Бөтә Рәсәйҙән, бигерәк тә Хәрби министрлыҡтан, башҡорт аттарын ылауҙар өсөн килеп алғандар. Ә бит аукцион бер көн генә булмаған, бер аҙна дауам иткән. Байҙарҙың 5-әр мең аты булған, уларҙы һатып, үҙҙәрен хәрби хеҙмәткә ҡорал менән тәьмин иткәндәр.

Тарихыбыҙ бай, Әнүәр Әсфәндийәров, Ырымбур өлкә архивында ғына 15 мең фонд тикшерелмәй ята, тип яҙғайны. Ә хәрби-тарихи архивта күпме икән? Музейҙарҙа?

Тағы бер мәсьәлә: тарихсыларыбыҙ башҡорт ихтилалдарын, башҡорттарҙың батша самодержавиеһына ҡаршы нисек көрәшкәнен тикшереп, бер һығымтаға килә - һәр ихтилалда еңелгәнбеҙ. Бындай һығымта кешене һүрелдерә, бахыр хәленә төшөрә. Ә бит, икенсе яҡтан ҡарағанда, ихтилалдарҙа беҙ еңеп сыҡҡанбыҙ, сөнки башҡорттар яугир, әммә илбаҫар йәки һуғыш суҡмары түгел, беҙ бары тик аҫабалыҡ буйынса үҙ талаптарыбыҙҙы ҡуйғанбыҙ, килешкәнбеҙ, аҫабалыҡҡа хоҡуҡтарыбыҙҙы раҫлатҡанбыҙ, шуға ла мөнәсәбәттәр ҡатмарлаша барған.

### Башҡорт кадет корпусы кәрәк

Ростов өлкәһендә һәр бер биләмәлә казак кадет корпустары бар. Улар һәр ваҡыт Мәскәүҙә үткән парадтарҙы аса. Башҡортостанда ла Павел Беренсе исемендәге башҡорт кадет корпусин асырға мөмкин бит. Әгәр бала саҡтан уҡ тәрбиәләмәһәк, дәүләт хеҙмәтенең айырым төрөнә - полицияға, ОМОН-ға, МЧС-ҡа, прокуратура, көс структураларына - эске ғәскәрҙәргә яҡшы әҙерлекле кадрҙарҙы ҡайҙан алырбыҙ? Был балаларға патриотизм тойғоһо, тыуған илгә, ергә һөйөү бала саҡтан һалынырға тейеш. Эйе, кадет корпустары бар, тиеүселәр ҙә табылыр. Уларҙың исеме генә кадет корпусы, ә тәрбиә бөтөнләй икенсе. Сөнки барлыҡ кадет корпустары, хатта Ишембайҙағыһы ла, МЧС ҡанаты аҫтында. Бындай корпустарҙа башҡорттар ғына уҡыһын тимәйем, башҡа милләттәр ҙә булһын, әммә унда мотлаҡ рәүештә башҡорттарҙың хәрби тарихы уҡытылырға тейеш.

Дөрөҫөн әйткәндә, иң яҡшы кадет корпустары яҡташыбыҙ, милләттәшебеҙ генерал Миңлеғәле Шаймуратов азат иткән һәм 400 башҡорт башын һалған Белая Калитвала. Ни өсөн 400 башҡорт тип ышаныслы итеп әйтәм, сөнки крайҙы өйрәнеүсе Рәсәй Фәндәр академияһы Көньяҡ фәнни үҙәгенең ғилми хеҙмәткәре В. Афанасенко билдәләүенсә, Дебальцевоға тиклем кавалерия дивизияһы 90 процентҡа башҡорттарҙан торған. 1943 йылдан һуң ғына ул йыйылма дивизияға әйләнә. Была ошо Белая Калитвалағы кадет корпусына мосолман балалары уҡырға инә алмай, сөнки унда уҡыусы православие диненә булырға тейеш. Был төп шарт. Әгәр башҡорт балалары иң яҡшы кадет корпусында белем ала алмай икән, тимәк, үҙебеҙҙекен асыу - заман талабы. Хәҙер ҙә бит бәләкәйҙән хәрби булырға хыялланған балалар юҡ түгел.



*Әгәр бала саҡтан уҡ тәрбиәләмәһәк, дәүләт хеҙмәтенең айырым төрөнә - полицияға, ОМОН-ға, МЧС-ҡа, прокуратура, көс структураларына - эске ғәскәрҙәргә яҡшы әҙерлекле кадрҙарҙы ҡайҙан алырбыҙ? Был балаларға патриотизм тойғоһо, тыуған илгә, ергә һөйөү бала саҡтан һалынырға тейеш. Эйе, кадет корпустары бар, тиеүселәр ҙә табылыр. Уларҙың исеме генә кадет корпусы, ә тәрбиә бөтөнләй икенсе. Сөнки барлыҡ кадет корпустары, хатта Ишембайҙағыһы ла, МЧС ҡанаты аҫтында. Бындай корпустарҙа башҡорттар ғына уҡыһын тимәйем, башҡа милләттәр ҙә булһын, әммә унда мотлаҡ рәүештә башҡорттарҙың хәрби тарихы уҡытылырға тейеш.*

### Әҙәбиәткә илткән юл

Бер ваҡытта ла яҙыусы булырға хыялланманым, һәр саҡ офицер булырға, тыуған илемә хеҙмәт итергә теләнем. В. И. Ленин исемендәге хәрби-сәйәси академияға уҡырға ингәс, физиктан лирикка әйләнеп киттем. Яҙмышымдың быңдай боролош алыуына хәҙер һис кенә лә үкенмәйем, бәлки, шул арҡала ла яҙыша башлағанмындыр. Әҙәбиәткә өлгәрәп етеп килдем, тиергә мөмкин. Ә ижад сығанағым, моғайын да, бала сағыма, туған тәбиғәтемә, крәҫтиән хеҙмәтенә барып тоташалыр. Әсәйем дә ҡул эше менән булышҡанда ла шым ғына ултырманы, беҙгә әллә күпме әкиәттәр һөйләй торғайны.

Мәскәүҙә уҡығанда, иң өлкән студент булараҡ, Башҡортостандан уҡыусы бөтөн студенттарҙың исемлеге миндә булды. Барыһы менән дә аралашып йөрөнөк. Шул йылдарҙа хәҙер "Истоки" гәзитенең баш мөхәррире Айҙар Хөсәйенов Әҙәбиәт институтында уҡый ине. Төньяҡ Кавказ хәрби округында хеҙмәт иткәндә яраланып, госпиталдә дауаланғанда уйланырға, хәтер һандығында ятҡан хәтирәләрҙе соҡоп сығарырға форсат тыуҙы. Шул ваҡытта беренсе хикәйәмде яҙҙым. Ул уңышлы дебют булды һәм Айҙар яҙамында "Уфа" журналында донъя күрҙе. Хәрби офицерҙарҙың үҙҙәренең башынан үткәнде, башҡалар күрмәгәнде әҙәби әҫәрҙәр аша бәйән итеүе, уларҙың әҙәбиәткә килеү осраҡтары юҡ түгел. Ундай миҫалдар байтаҡ, бәлки, мин уларҙан балалар өсөн әкиәттәр ижад итеүем менән генә айырыламдыр. Балалар өсөн яҙыу, бәлки, ҡандан да киләлер, ни тиһәң дә, балалар яҙыусыһы Рәсимә апай Ураҡсина менән өс туған булһаҡ та, бер туғандар кеүек аралашып йәшәнек. Шулай уҡ атайым яғынан Әхиәр Хәкимов та туған ине, унын әсәһе сығышы менән минең тыуған ауылым Яңы Яппарҙан.

Атайымды Яңы Яппарҙа ғүмер иткән башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе Сафуан Яҡшығолов уҡытҡан. Ә башҡорт мәғрифәтселегенең тамырҙары тәрәнгә барып тоташа. Мин эске гармонияға өлгәшеү өсөн ата-олатайҙарыбыҙҙың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡларға тейешбеҙ, тип уйлайым. Традицияларҙың күсәгилешлеге - ул дөрөҫ фәлсәфә.

Былтырғы Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Әҙәбиәт йылы яҙыусыларға ла, башлап яҙыусыларға ла яңы ижади һулыш бирҙе, тиер инем. Мине Яҙыусылар союзына алдылар. Әҫәрҙәремде Дәүләкән районында, яҡташым Вячеслав Аброщенко "Башҡорт һунарсылары гәзите"ндә сығарып тора, ошо баҫма китапханаһы тамғаһы аҫтында китаптарым донъя күрә. Ғөмүмән, Башҡортостанда нәшриәт эше юғары кимәлдә алып барыла.

Хәҙер күптәр, нимәгә ул гәзит-журнал, интернет бар ҙа инде, ти. Яҡшы әҫәрҙәр, минеңсә, интернет селтәренә эләккәнгә тиклем яҡшы нәшриәттә донъя күрергә тейеш. Профессионалдар еренә еткереп әҙерләгән әҫәрҙе меңләгән кеше уҡыясаҡ, ә интернетҡа теләһә нимә һалырға мөмкин. Ташҡа баҫылғанды ғына интернетҡа һалырға кәрәк һәм уға кешеләр ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтасаҡ. Ә интерент селтәренә сыҡҡанға тиклем текст өҫтөндә профессионалдар эшләргә тейеш. Шуға күрә, Башҡортостан әле сығып килгән барлыҡ матбуғат баҫмаларын һаҡлап ҡалһын ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Әсәйемдең һөйләгән әкиәттәренән, хикәйәттәренән үҙем өсөн мөһим бер һабаҡ алдым - мин ер-һыуыңыҙ, тамырыңыҙ кеше түгел. Тамырҙарым ныҡлы һәм тәрәнгә китә. Һәр кем иртәме ул, һуңмы, ҡасан да булһа үҙенә: "Мин кем? Тамырҙарым ҡайҙан?" - тигән һорау бирә һәм ғүмер буйы ошо һорауына яуап таба алмай. Ә мин ул һорауға яуапты бала сағымда уҡ тапҡайным инде", - ти Мәхмүт Бакир улы. Аҡыллыға тағы бер ишара был: балаларға бәләкәйҙән кем булыуын, тамырҙарын аңлатыу мөһим.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

***✓ Ағзаны тамырҙары менән күкрәк ҡыуышлығынан ысҡындырып алғанда ла, махсус һыуытҡысҡа урынлаштырғанда ла, ҡиммәтле аҫылташ менән эш иткән оҫта итеп хис итте ул үҙен. Һәм башында бер уй яралды.***



Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# АЛДА ҒҮМЕР БАР ӘЛЕ

ПОВЕСТЬ

Богдан Радионович тағы оҙаҡ ҡына йыуатты Сергейҙы, стрестан хәлен артыҡ ҡатмарлаштырып ебәреүен аңлатырға тырышты, тынысландырыу дарыуҙарына рецепттар яҙып бирҙе. Тик баҫылманы күңеле Сергейҙың, киреһенсә ниндәйҙер шом инеп ятты. Һөнәри тәжрибәһе лә, тәбиғи тойомлау һәләте лә бында ниндәйҙер бер йомаҡ барлығын аңғартты. Күңгәнлеген белдереп, өндәшмәй генә сығып китһә лә, кинәт аңы асылып, нисә айҙар буйына башын томалаған томан таралып киткәндәй булды. Ошо көндән башлап ул клиниканың тормошо менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланы. Тапты теге Савичевты ла. Йәш табип тәфтишсенең баҫымы аҫтында бик оло сер итеп кенә ҡыҙыҡһыныуын еңә алмайынса үҙенең ҡулы аҫтына инмәгән документтарҙа ҡутарынғаны һәм ситкә мәғлүмәт сығарғаны өсөн эштән ебәрелеүе хаҡында һөйләне. Ярай әле ғариза менән ебәргәндәр, юғиһә статья менән оса яҙған. Ә инде документтарҙағы "Диана Колесниковаға донор тотонолдо" тигән юлдарҙы үҙ күҙҙәре менән күргән. Белгәндәрен ҡалтырана-ҡалтырана һөйләп бөткәндән һуң әле ярты сәғәттәй был хаҡта берәүгә лә әйтмәүҙе, серҙе үҙендә генә ҡалдырыуҙы ялбарҙы табип. Ул да һиҙә күрәһең, эштең ниндәйҙер ҡара тәрәнлектән килгәнлеген, был хәлдең артында аңлайышһыҙ оло ҡурҡыныс барлығын. Сергей Савичевҡа бәйләнеште өҙмәҫкә һәм хәбәрһеҙ юғалмаҫҡа бойороп, егеттең инде үҙенең һағы аҫтында буласағын әйтеп китте. Ҡайтып шул төндө керпек тә ҡаҡмайса план төҙөнө ул. Бер ятты, бер ултырҙы, әле бүлмәһендә кәләп һуҡты, әле балконға сығып тәмәке көйрәтте. Әллә нисә шәшке ҡәһүә артында башында өрөлткәндәрен блокнотына төшөрҙө. Ҡыҙы менән башланған бәләләр барышында табип менән булған һәр һөйләшеүен, үҙенең ниндәй һорауҙар биреп, уның нисек яуаплағанына тиклем хәтерендә яңыртырға тырышты. Һәр иҫләгәнен ентекләп анализланы, уйланды, һығымталар яһаны. Эйе, енәйәт бар ине был хәлдәрҙең артында. Тәжрибәле тәфтишсе быны аңы-ҡаны менән тойҙо, тик төйөндө тартып тағатып ебәреү өсөн еп осон ғына таба алманы. Әммә ул табырға тейеш, тағатырға тейеш ул был йомғаҡты. Юғиһә, үҙен бер ваҡытта ла ғәфү итә алмаҫ.

Көҙгө ҡояш һуң ғына уянып, инде күптән шау-шыулы тормош башлаған оло ҡала өҫтөнә күтәрелгән мәлде - таңды ошондай ғазаплы уйҙар менән ҡаршыланы Сергей Колесников.

* * *

Водителен ебәрҙе Богдан, руль артында үҙе хәҙер шуға. "Ял ит" тигән булһа ла уның арыуында эше юҡ, бары ҡайҙа һәм кем янына барыуын ғына күрһәткеһе килмәй. Ә инде кемгә барғанын уйлаһа, үҙенә көлкө. Тик нисек кенә булғанда ла әлеге ваҡытта ошо теләгенән ҡаса ла, ҡотола ла алмай. Ана шул теләк ҡоллоғонда йәшәп ятыуы һуңғы көндәрҙә. Бер йәш ҡыҙҙы күреү өсөн китеп бара ул. Уйламағанда, көтмәгәндә, ир уртаһы ҡорона инеп барғанда танау аҫты ла кибеп етмәгән студенткаға күҙ һалды. "Һалды" тиеү генә дөрөҫ булмаҫ, "төштө" уның күҙе. Операция бүлмәһенә ҡаҙ көтөүе итеп килтереп индерелгән студенттар төркөмөнән әллә нишләп ана шул сибек кенә һынды айырып шәйләп алды ла, аҡ маска өҫтөндәге ҡурҡыуынан сынаяҡ аҫтындай булып түңәрәкләнгән күҙҙәр сихырынан арбалды. Ысынлап арбалды, китаптарҙа яҙылғанса ҡапыл ҡаушап, ҡулындағы скальпелын төшөрөп ебәрә яҙҙы. Ә ҡыҙҙың унда эше лә юҡ, алдындағы уларға асыҡ дәрес биреүсе хирургты ул һуйыусы, ә операция өҫтәлендә ятҡанды ҡорбан итеп кенә күрә. Ана ҡолайым, бына ҡолайым тип сайҡала биреп торҙо ла, янындағы хәле үҙенекенән саҡ ҡына ирәберәк булған иптәшенең беләгенә аҫылынды.

Операциянан һуң, табип кабинетындағы һөйләшеүҙә, тыныслығын боҙоусының исемен белде - Альбина икән. Ни өсөн хирургия бүлегенә барғандыр, ғәҙәттә ҡыҙҙар был һөнәрҙе һайламай.

Шунан һуң тағы ла бер-ике асыҡ дәрестә күрештеләр, ҡыҙ ниндәйҙер һорауҙар менән янына ла китеп китте. Буласаҡ докторҙың һайлаған һөнәрен әллә ни төшөнөп етмәгәнен аңлаған Богдан, ҡотҡоло теләктәренә баш була алмай, уны айырым практик шөғөлгә саҡырҙы. Студентка бер аҙ ҡаушаһа ла риза булды.

Ҡатмарлы булмаған йөрәк операцияһын күҙәтеп торған ҡыҙҙың әленән әле ҡарашын тотто Богдан. Хайран булып баҡҡан был күҙҙәрҙең һоро бәрхәтендә ирене, бығаса бер ваҡытта ла кисерелмәгән ниндәйҙер рәхәтлек, ирәбелек тойғоһона солғанды. Ҡулдары үҙҙәренән-үҙҙәре белгәнен башҡарҙы, ә башын бөтөнләй икенсе уйҙар биләне. "Ниңә әле аҡылы ла етлегеп етмәгән сәпсектәй ҡыҙыҡайға күңеле тартыла? Уның һайлағаны ошо булырға тейешме ни? Диңгеҙ ярындағы виллаһына алып барасаҡ ҡатынын һис юғы баш әйләндерер төҫ-ҡиәфәттә итеп күҙ алдына килтерә ине бит. Уға башҡалар ҡарарға ла, һуштан яҙырға тейеш ине. Банктарҙа ятҡан иҫәпһеҙ аҡсаларын, сейфтарындағы аҫылташ-мәрйендәрен ошо ҡыҙыҡай менән бүлешергә тейешме? Был нимә, мыҫҡыл итеүеме яҙмыштың? Уҫал шаяртыуымы? Ә ҡалай рәхәт... Ошо кешенең эргәндә йөрөүе, һүҙ ҡушыуы, күҙ һалыуы аҡылды юйҙырта... Ну, ҡаптың, Богдан, ҡаптың..."

Эштән һуң ни булһа ла булыр тип: "Әйҙә ял көнө берәй ергә барайыҡ", - тигәйне, Альбина бер аҙ уйланып торғас, тура ҡарап:

- Ә һеҙҙең ҡатынығыҙ юҡмы ни? - тип һораны.

Уйынлы-ысынлы яуапланы Богдан:

- Юҡ шул.
- Ниңә улай?
- Әллә... Һинең кеүекте осратмағанмын, күрәһең.

Театрҙан сыҡҡас, оҙаҡ ҡына һөйләшеп йөрөнөләр. Альбина уҡытыусылар ғаиләһендә үҫкән, табип буласағын үҙе хәл иткән. Уның балаларса бер ҡатлылыҡ менән "Кешеләргә ярҙам итергә теләйем", тигәненә Богдан иларға ла, көлөргә лә белмәне. Үҙенең бындай эскерһеҙ саф теләктәр кисермәгәненә бик күп йылдар үткәндер кеүек тойолдо. Бик ҡарт итеп тойҙо шул саҡ үҙен, эске донъяһы таушалып, ҡаҡшап бөткәндәй булды. Янындағы хисләнеп һөйләгән ҡыҙ баланы тыңланы ла уның кеүек мәлдәрен ҡайтарғыһы килде. Тик булдымы икән уның ошондай сағы? Уның да шулай донъяға яратып, кешеләргә һоҡланып ҡараған саҡтары бар инеме һуң? Әллә йәне баштан ағыуланғайнымы?

Альбина менән аралашҡан, уны яҡшыраҡ белгән һайын, Богдан нығыраҡ әсирләнә, ҡыҙ ҡоллоғона тарый барҙы. Башта ҡабул итмәгән эскерһеҙлек, ябайлыҡ яйлап уның да йөрәк ҡалҡанын тишеп инде. "Һәр нәмәнең үҙ урыны" тигән булып һалҡын аҡыл менән уйларға тырышһа ла, эсендә ике төрлө донъя төшөнсәләре айҡашты. Береһе "әүәлгесә йәшә", тип баҫһа, икенсеһе "улай бармай - үҙгәр", тип тызып, бимазалап торҙо.

Шул мәлдәрҙә үҙенең бығаса яңғыҙ булыуын, дуҫтарһыҙ, яҡындарһыҙ икәнлеген аңланы ҡарт егет. Туғандары менән дә йылына бер тапҡыр атай йортонда ғына күрешеүен иҫәпкә алмағанда, шылтыратып хәлдәрен белергә лә ваҡыты юҡ. Уны барыһы ла онотҡан, әллә үҙе онотторған, һыуытҡан араларҙы - аңламаҫһың. Әле килеп бынауы тәтелдәк ҡыҙ бығаса кәрәге булмаған тойғоларҙы уятып, намыҫын семетмәксе әллә? "Китсәле, минең идеялар шул бер бала-сағаның етлекмәгән теләктәренә лә ҡаршы тора алмаймы ни", тип ҡәнәғәтһеҙ баш сайҡаһа ла, шул мәл балаларының әсәһе итеп тап ошо ябай, алсаҡ, йомшаҡ күңелле ҡыҙҙы күрергә теләгәнен аңланы Богдан. Аҡылы ҡаршылашһа ла, йөрәге шулай хәл итте: ул өйләнергә тейеш. Ошо арала эштәрен ослаясаҡ та, йәш кәләше менән диңгеҙ аръяғына күсеп китәсәк. Төпләнәсәк шул яҡта, онотасаҡ барыһын да, бәхетле, тыныс тормош менән йәшәп китәсәк. Ҡасандыр үҙенең бала сағындағы кеүек өй тулы балалары булыр, муллыҡта, байманлыҡта көн итерҙәр.

Богдан ябай ғаиләлә үҫте. Уның ҡарамағына хәйерсе ябай. Атаһы ғүмере буйы завод тимерлегендә туҡылдап, байҙарға семәрле ҡоймалар ҡойоп, рәшәткәләр нағышлаһа ла, үҙенең донъяһына ундайҙы рөхсәт итә алманы. Әсәһе балалар дауаханаһында иҙән йыуҙы. Тапҡан ғыналары алты баланы ашатып-кейендереүҙән уҙманы. Шунлыҡтан хәлле тиҫтерҙәре ҡулында йәки өҫтөндә булған күп нәмәләр Богдандың төшөнә генә инде. Көнсөллөк менән бәләкәйҙән таныш. Хәтерендә, ихатала сәпиткә атланған малайҙар һаны көндән-көн арта барып, бер мәл Богдандан башҡалар бөтәһе лә һыбай атланып бөттө.

- Әсәй, ҡасан сәпит алабыҙ? - тип кис һайын аш артында һүҙ ҡуҙғатты малай, ата-әсәһенә алмаш-тилмәш ҡарап.

- Алырбыҙ, башта Викаға куртка алайыҡ та, - тип тынысландырҙы уны әсәһе.

Бер аҙнанан Богдан был һорауын тағы ла, был юлы инде инәлеслерәк итеп ҡабатланы.

- Түҙеп тор, Бодя, Зинаның итектәре туҙған, - әсә улының таҡыр башын дымлы алъяпҡысына ҡыҫып һөйҙө лә, эйелеп түбәһенән үпте. - Һин бит аҡыллыһың, балам.

Атлана алманы тәки үҙ сәпитенә Богдан, ала алманы уны әсәһе, аҡсаһы артманы. Тиҫтерҙәренең һыбай елгәнен тәҙрә аша күҙәтеп ҡара янды малай. Урамдағыларға ла, өйҙәгеләргә лә булған асыуы алҡымынан ашып күҙ йәштәре булып түгелде.

Ярай әле яҡшы уҡыны. Артыҡ тырышмаһа ла бер уҡығанын, һөйләгән-аңлатҡандарын шунда уҡ башына һалды, белде, төшөндө. Шул һәләте күҙҙән төшөрөп ҡалдырманы үҙен. Хатта күтәрҙе лә әле. Мәсьәлә эшләтеп алыусылар ҙа, шыпырт ҡына контроль эш вариантын ебәреүселәр ҙә булып торҙо. Һәр береһенең айырым хаҡы бар, әлбиттә. Мәктәптә был түләүҙәр тундырма, һағыҙ, туп хаҡы булһа, медицина институтында уҡығанда кроссовки, куртка кимәленә күтәрелде. Тик былар ғына аҙ ине уға. Уның байығыһы, аҡсаны усында йомарлап тотоп, иркен һелтәнеп йәшәгеһе килде. Был теләк шул тиклем көслө ине һәм ул, уҡыуын ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып булһа ла, институт ятаҡтарына тыйылған тауарҙар индереп сауҙа ойоштороҙо. Йәшерен араҡы эшләгән урындарҙан был ағыуҙы оло һауыттар менән барып алды ла, һәр ятаҡта нөктәһен булдырҙы. Ул ғына ла түгел, үҙәк баҙарҙа емешеләк менән тәьмин итеүселәргә яҡынлап алып, улар аша төрөп тарта торғандарын да сығарта башланы. Бына был сауҙа, исмаһам, килем килтерә ине. Юлы ҡиммәт булыуға ҡарамаҫтан, хаҡын бишләтә ҡаплай. Ҡуласа эсендәге тейен кеүек алһыҙ-ялһыҙ ошо бизнеста әйләнде егет. Башҡалар кеүек ялдарын төшкәсә йоҡлап ятманы, ҡыҙҙар артынан сапманы, хатта гүзәл заттың барлығын да аңғарманы, буғай. Һәр тапҡан тинен икеләтә, өсләтә арттырырға тырышты, ҡулына ингәндәрен һаҡлап, ҡәҙерләп һала барҙы. Күп тә үтмәй машиналы булды. Уға бурыслылар, көнө ҡалыусылар, инәлеп килеүселәр күбәйҙе. Шулай хан дәрәжәһендә ине ул һуңғы курстарында.

Микрохирург һөнәре алып сыҡҡас, үҙ өлкәһе дауаханаһына ҡайтарҙылар. Шунан йүнәлтмә менән уҡығайны бит. Бурысын тапшырырға кәрәк. Эшләй башланы. Иртәнән ҡара кискәсә, унан ҡалһа, төндәрен дә шул операция өҫтәле, бөткөһөҙ ауырыуҙар, ҡағыҙҙар, йоҡоһоҙлоҡ, яуаплылыҡ тиҙ ялҡытты Богданды. Фатир менән ашауға ла етмәгән эш хаҡына ла риза түгел. Тик нишләйһең, ул бында ун йыллыҡ "ҡоллоҡҡа" килешеү төҙөгән, уны ошо дауаханаға кәрәкле табип итеп уҡытып алғандар.

Бер көн ҡапыл операция алдынан баш табип ҡыҫҡаса ғына итеп ауырыуҙың йәшәүгә шансы юҡлығын һәм туғандарының рөхсәте менән йөрәге донорлыҡҡа алына икәнлекте аңлатты. Артыҡ иҫе китмәне быға йәш хирургтың, төрлө сәбәп менән операция өҫтәленә килеп тарығандарҙың яҡты донъя менән хушлашҡандары ла, ағзаларын күсертеүгә ризалашҡандары ла, үлгән хәлдән терелеп киткәндәре лә етәрлек. Ә бына ул йөрәкте һатып алырға теләгәндәрҙең тәҡдим иткән суммаһын ишетеүгә, телһеҙ ҡалды. Был бит... байлыҡ! Бер йоҙроҡтай ғына ағзаны шундай хаҡҡа ал сәле. Әллә ҡайҙағы ғәрәпкә шул хаҡҡа беҙҙәге урыҫтың йөрәге кәрәк микән ни? Ағзаны тамырҙары менән күкрәк ҡыуышлығынан ысҡындырып алғанда ла, махсус һыуытҡысҡа урынлаштырғанда ла, ҡиммәтле аҫылташ менән эш иткән оҫта итеп хис итте ул үҙен. Һәм башында бер уй яралды. Ҡырағай, әммә татлы, арбағыс уй. Ул хыял ятҡанда-торғанда ла егеттең баш мейеһен быраулап, сығыу юлын эҙләп кенә торҙо.

**(Дауамы бар).**

БАҪЫЛҒАНҒА ҠАЙТЫП...

**Гәзитебеҙҙә 2005 йылдың 30-41-се һандарында Әбйәлил районынан әүҙем авторыбыҙ Иҙрис Ноғомановтың "Әрме" хәтирәләре баҫылып сыҡҡайны. Уны уҡыусыларыбыҙ бик йылы ҡабул итте. Шунан инде күптәр - Рауил Айсыголов, Рәмил Солтанов, Хәлил Һөйөндөков, Илдар Исламов, Фәнил Ҡоҙаҡаев, Мотал Рәмов, Сәлих Дәүләтбирҙин, Мөхәррәм Бейешов, Айҙар Күсәев, Зәкирйән Әминев һ.б. үҙҙәренең әрме хәтирәләрен тәҡдим итте гәзитебеҙгә. Был яҙмалар уҡыусыларыбыҙ күңелендә ысын ир-егет һынын, илһөйәрлек өлгөһөн тергеҙҙе. Хатта бер ҡатын-ҡыҙ: "Әрме" яҙмаларын уҡығас, һалдат булғы килеп китте", - тип яҙҙы. Тәҡдим итеүселәр булһа, ундай яҙмаларҙы беҙ бөгөн дә ҡабул итергә әҙербеҙ. Ә хәҙер "Әрме" яҙмаларынан өҙөк:**

# ӘРМЕ ЯҘМАЛАРЫ



● **Иҙрис НОҒОМАНОВ:** "Әрме һүҙен ишетеү менән күптәрҙең күңелен ауыр тойғолар солғап ала. Бөгөнгө үсмерҙәрҙең һәм йәштәрҙең әрменән ситләшергә, ҡотолоп ҡалырға тырышыуының сәбәбе нимәлә һуң? Минеңсә, бында бөгөнгө система ғәйепле. Заманында беҙ әрмегә үҙебеҙ теләп, атлығып, рухланып бара инек. Һалдат уландары өсөн ата-әсәләре ғорурлана торғайны. Ватанды һаҡлаусыларға ҡарата ихтирам, хөрмәт ҙур булды. Хеҙмәттә булмағандарҙан, "списать ителгәндәр" тип, иң әүәл ҡыҙҙар көлә торғайны. Егетмен тигән егет өсөн ошонан да ҙурыраҡ хурлыҡ булдымы икән?

Армиянан ҡурҡыу Афған һуғышынан һуң башланды. Ниндәй ата-әсә үҙ балаһын ут эсенә индергеһе килһен инде? Бөйөк держава тарҡалып, Рәсәй биләмәләрендә конституцион тәртип "урынлаштырыу" башланғас, ҡоралды көстәргә ҡараш кире яҡҡа үҙгәрҙе. Шул арҡала балаларын нисек тә әрме хеҙмәтенә ебәрмәҫкә тырышып яткандар күбәйҙе, армиянан баш тартыусылар, дезертирҙар ишәйҙе.

Күп кенә ата-әсә уларын әрмегә ебәрергә теләмәү сәбәбен "дедовщинаға" бәйләп аңлата. "Бабайсылыҡ" элек тә булды, тик ул саҡта һүҙ азатлығы булмаған, әрменең был күренеше баҫырылып килде. "Бабайсылыҡ" булды, бар һәм буласаҡ. Унан ҡурҡырға ярамай. Сөнки яңы ғына һалдатҡа алынып, аяғына сылғау ҙа урай белмәгән салага менән дембелен көтөп йөрөгән "карт" һалдат араһындағы айырма - ер менән күк араһы. Тәжрибәле, рухи һәм физик яҡтан сыныҡҡан, ир ҡорона аяҡ баҫҡан һалдат ата-әсәһе ҡанаты аҫтынан яңы сыҡҡан, малайлыҡтан егет ҡорона инеп барған үсмерҙе әрме серҙәренә, хәрби тормош хикмәттәренә өйрәтә башлай.

Рухы сибек, ихтыяр көсө самалы, тейер-теймәҫтән шыңшып-зарланып барыусан әҙәмгә армияла урын юҡ. Унда ҡарыштыңмы - бөттөң. Тиккә генә унда "Не можешь - научим, не хочешь - заставим" тигән һүҙҙәр ҡанатлыға әйләнмәгән.

Ир-егет илен һаҡларға бурыслы. Әрменән түгел, үҙеңдең холҡоңдан, бешәлкәһеҙ булыуыңдан ҡурҡырға кәрәк. Әрмелә хеҙмәт итеү - егетлек. Әрме - ул ҡорал, тимәк - хәүеф. Ә хәүеф кешенең асылын ярып һала, характерын сыныҡтыра. Кемдең кем икәне лә әрмелә күренә. Әрмелә булмаған ир - ярты ир, ҡурасыл, көмсәлекле әҙәм. Ундай зат сифатлы нәҫел дә ҡалдыра алмай. Ҡулына ҡорал тотоп, дары еҫкәмәгән ирҙән ни фәтеүә. Әрменән тороп ҡалып, ошоно ҙур батырлыҡҡа һанап, ата-әсәһе елкәһендә көн күреп ятҡан йәштәргә ҡарайһың да, ошондай уҫал фекерҙәргә килеп ҡуяһың хатта. Әлбиттә, әрменән барыһы ла үҙ теләге, үҙ ихтыяры менән ситләшмәй. Яҙмыш тарафынан ҡыйырһытылған ундайҙар мине аңлар. Аңлар һәм ҡырыҫырак, әммә хаҡ һүҙҙәрем өсөн ғәфү итер...

...Йәш ҡыҙҙарға еткерер һүҙем дә бар: әрмеләргә киткән егетегеҙҙе ышандырып, көтәм, ҡайт, тип шәмәреп ҡалғанһығыҙ икән - көтөгөҙ. Яҙмыш ҡосағына япа-яңғыҙын ташламағыҙ һалдатты. Көтә алмаһағыҙ - вәғәҙә итмәгеҙ. Хыянат һалдаттың рухын һындыра, киләсәккә өмөтөн өҙә. Ә өмөтһөҙ йәшәүҙәре, ай-һай... Көн дә хат яҙ, фото ебәр, тип быуынһыҙ еренә бысаҡ һалмағыҙ. Ҡайһы урынға, ниндәй шарттарға эләгә бит - шуныһы бар. Һаҡлағыҙ, ҡыҙҙар, һалдаттарығыҙҙы! Һеҙ һалдатҡа тоғро булһағыҙ, һалдат тыуған иленә тоғро ҡалыр! Мөхәббәт кешене йәшәтә, ҡанат ҡуя, асмандарға аштыра! Бөйөк эштәргә этәрә! Шуны онотмағыҙ, һылыуҙар!.."

● **Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ, отставкалағы подполковник:** "...Хәрби хеҙмәткә һөйөүем өс-дүрт йәшемдән башланды, тиһәм дә хата булмаҫ. Сөнки иҫ белә башлағандан алып, хәрби училищела уҡып, йыл һайын отпускыға ҡайтҡан Ғайса ағайымды күреп үҫтем. Ялтыр значоктары, эмблемалары, фуражкаһындағы урак-сүкешле ҡыҙыл йондоҙо, көҙгөләй балҡыған бил ҡайышы пряжкаһы, шығырҙап торған йылтыр итектәре һушымды ала ине. Бер аҙ үҫә төшкәс, башланғыс мәктәптә уҡыған осорҙа (ул саҡта бөтөн малайҙар "Һалдат уйыны" уйнаны) индәремә лейтенант погондары тағып, билемде ағайым бүләк иткән әр-яны портупея менән ике мәртәбә уратып быуып уйнағаным хәтеремдә. Өсөнсө синыфта уҡығанда рядовойҙан генералға тиклем ун бишләгән званиены эҙмә-эҙ яттан айыра ала инем.

Ул саҡта барыбыҙ ҙа һалдат булырға хыялландыҡ. Иптәш малайҙарҙың ағалары хәрби хеҙмәттән ҡайтһа, һалдат күрергә йыйыла инек. Һәр беребеҙгә бер-ике бөртөк кәстәнәс кәнфит эләгә. Һалдаттың ҡустыһы - иң бәхетле кеше... Миңә ундай бәхет йыл да эләгеп торҙо. Сөнки хәрби званиелары үҫә барған ағайым йыл да отпускыға ҡайта.

Аттан ҡолап, ҡулымды һындырҙым бер саҡ. Гипслы ҡулымды муйыныма аҫып йөрөгән мәлемдә мине тәүге таптҡыр хәрби комиссариатҡа медицина комиссияһына саҡырттылар. Хирург Зияев ағай медицина картаһына "перелом" тип яҙып ҡуйғас, йөрәгем табаныма төштө. Армияға алмаясаҡтар. Нисек ҡайғырғанымды белһәгеҙ икән! Хәҙер генә көлкө һымаҡ. Комиссия үтеп бөткәс, табибтарға һиҙҙермәй генә медицина картаһындағы хирург яҙған битте йыртып алдым.

Х синыфты тамамлар алдынан хәрби училищеға барырға теләгемде әйткәс, әсәйем һыҡтап-һыҡтап иларға кереште. "Ағайың нисә йыл инде үәйеннейҙә йөрөй, инде хәҙер һин дә шунда китергә булдыңмы? Һеҙҙе күрә алмай, үлеп китермен инде..." Әсәйемдең күңелен ҡырмаҫҡа булдым һәм Өфөләге медицина институтына уҡырға индем. Әммә хәрби булыу теләге ташламаны. IV курсты тамамлағас, артабанғы курстарҙы Ҡуйбышев хәрби-медицина факультетында уҡып, хәрби табип булыу мөмкинлеге килеп сыҡҡас, күҙ йомоп шунда ынтылдым. Был факультетты ул саҡта хәрби медицина академияһы тип тә атайҙар ине.

...Ҡуйбышев ҡалаһына килеп төшкән көндө үк барыбыҙ ҙа киҫкә ҡарай хәрби курсант формаһында инек. Кисәге оҙон сәсле студенттар бер-беребеҙҙе танымай ҙа торабыҙ. Башҡортостандан егерме ике егет килгәйнек. Курсанттар барлыҡ Советтар Союзы республикаларынан йыйылғайны. Арала күптәр Совет Армияһы сафында хеҙмәт итеп ҡайтҡан. Кисәге дембелдәр китель яғаларының ырғаҡтарын ысҡындырып ебәргән, күптәренең погондарында - сержант лычкалары. Яловый итек ҡуныстарын "гармошкаға" йыйырып ҡуйғандар. Күкрәктәрен кирә биреп, аяҡтарын тарбайтыбыраҡ атлайҙар, беҙҙең кеүек йәшерәктәрҙе ураn үтергә мәжбүр итеүҙәре уларҙың өстөнлөгөн күрһәтә ине. Айырыуса украин иптәштәр был йәһәттән килештерә. Уларҙың береһе, Заграничный фамилиялы йыуан курсант, мине магазинға тәмәкегә ебәрмәксе итте. Барманым. Йыуашыраҡ сыуаш егетен ул кибеткә ебәрҙе. Был егеттәрҙең "бабайлығы" уҡыу йылы башланып, бер аҙна үткәс үк ҡул менән һыпырып алған кеүек юҡ булды. Сөнки уҡыу программаһы барыбыҙҙан да белем талап итә. Барыбыҙға ла ике йылдан лейтенант званиеһы бирәсәктәр... Әйткәндәй, күпмелер йылдан һуң һаман да капитан званиеһында булған тап ана шул Заграничный менән осрашырға тура килде. Ә мин подполковник инем ул саҡта...

...Сит ерҙәрҙә оҙаҡ йөрөһәң, тыуып үҫкән ерең күпкә ҡәҙерлерәк була икән ул. Аллаһы Тәғәлә ҡасандыр бик алыҫ, барып етә алмаҫлыҡ тойолған хыял йондоҙо - тыуған Башҡортостаныбыҙға имен-һау ҡайтырға насип иткән икән.

Ҡайтып, Сибай дауаханаһында эшләй башлағас, тәүҙәрәк бик ҡыҙыҡ тойола ине. Бергә эшләгән коллегалар, пациенттар башҡортсалап "Һаумыһығыҙ!" тип һинең менән күрешә, ә һин уларға рәхәтләнеп "Һаумыһығыҙ!" тип яуап бирәһең. Улар үҙ телебеҙҙә үҙҙәренең үтенесен әйтә, ауырыуҙарын һөйләй. Араларында егерме биш йыл буйы күрмәгән таныштар, класташтар ҙа осрай. Бына ҡайҙа ул - хөррият! Үҙ илеңдә, үҙ телеңдә иркенләп һөйләшеп йөрөүҙәре...

Шулай ҙа ҡанға һеңеп киткәнмелер, хәрби хеҙмәт һаман да төшкә инә. Йә тревога, йә строевой плацҡа ашығам, йә учениеларҙа йөрөйөм, йәиһә миңә сираттағы полковник званиеһы биргәндәр. Урамда отпускыға ҡайтҡан берәй һалдатты йә офицерҙы күрһәм, бер туғанымды күргән һымаҡмын..."

● **Айҙар КҮСӘЕВ:** "Ул саҡтарҙа башҡортса баҫмаларҙа Совет Армияһы тураһында артыҡ яҙа һалып бармағастары, "Советский воин", "Знаменосец", "Авиация и космонавтика" журналдарын, "Красное знамя" гәзитен алдырып, аңлаһам-аңламаһам да, энәһенән ебенә тиклем уҡып бөтә торғайным. Хәрби кеше булыу теләге шул хәтлем көслө булғандыр инде. Ул осорҙа телевизорҙан да хәрби темаларға арналған тапшырыуҙар йыш күрһәтелә ине. Клубта күрһәтелгән киноларҙың да күпселеге һуғыш темаһына була торғайны. Эй, йөтлөгөп ҡарай инек беҙ уларҙы. Ә инде ҙур байрамдарҙағы хәрби парадтар үҙе бер тулҡынландырғыс ваҡиға булды.

Бөгөн шул саҡтар иҫкә төшһә, аптырайым: хыялға ынтылыш шул тиклем көслө булған! Һигеҙенсе класты бөткәс, бер төркөм тиҫтерҙәрем менән Суворов училищеһына барырға уйлағайныҡ та, кәрәкле документтарҙы юллай алманыҡ. Әммә хәрби кеше булыу теләге спорт менән дуҫлаштырҙы. Шуға күрә, төрлө насар ғәҙәттәргә ылығыуға ваҡыт та, теләк тә булманы. Сөнки хәрби кеше бөтә яҡтан да камил, көслө кеше булырға тейеш, тип аңлай инем. Хәйер, был һөнәр эйәләрен мин бөгөн дә шулай күҙ алдына килтерәм. Хәрби кейемдәге кешене күреү ҙә ныҡ тәьҫир итә ине. Ул замандарҙа егеттәрҙең армияға китеүе һәм хеҙмәт итеп ҡайтыуы ауыл өсөн үҙе бер ҙур ваҡиға була торғайны.

Армияға барыуҙы үҙем ихлас теләп ҡабул иткәнгә күрә, бер ниндәй ауырлығын тойманым. Ғөмүмән, беҙҙең башҡорт егеттәре өсөн ауырлыҡтар һиҙелмәй ҙә, шикелле. Сержанттар мәктәбенә Башҡортостандан өс йөҙләп кеше барғайныҡ, төрлө частарға таралып бөттөк, беҙ икәү ( мин - Баймаҡтан, дуҫым - Бөрйәндән) бер урынға эләктек. Учебкалағы бөтә имтихандарҙы ла гел "биш"кә биреп, шунда уҡ сержант званиеһы алдыҡ. Миңә беҙ бирешергә тейеш әле, Салауат тоҡомдары бит беҙ!

Ә ваҡыт тигәнендә туҡтатып та, тотоп та булмай - йә һин ваҡытҡа, йә ул һиңә хужа. Хеҙмәт осорондағы ике йыл оҙаҡ тойолһа ла, йылдар үткән һайын ул күҙ асып йомған аралағы ваҡыт кеүек тойола хәҙер. Ваҡытында теләп эшләнгән эш йылдар үткәс, файҙалы яғы менән кире әйләнеп ҡайта. Эйе, ҡурҡмайынса, армияны теләп ҡабул итергә кәрәк. Шул ике йыл эсендә күпме малай-шалай ир ҡорона инеп ҡайтты. Мәсәлән, миңә армия бик күпте бирҙе. Яҙғандарымды уҡып, бәлки, берәүҙәр кирза итекле саҡтарын һағынып иҫкә алыр, икенселәрҙә армияла хеҙмәт итеү теләге уяныр.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺИМЕҘ ҠАТЫН... яраттыра

■ Гарвард университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡайнар какао ҡулланыу ҡарттарҙың баш мейеһе торошон һәм хәтерен яҡшырта. Ғалимдар быны какао составындағы флаваноидтар менән бәйләй. Һынауҙарҙа уртаса 73 йәшлек кешеләр ҡатнашҡан. Ай дауамында улар көнөнә ике тапҡыр какао эскән. Асыҡланыуынса, бынан һуң уларҙың баш мейеһендә ҡан әйләнеше яҡшырған, хәтерҙәре нығыған. Какао тромбтар һәм насар холестерин, ҡан тамырҙары системаһы ялҡынһыныуын булдырмай.

■ Ә бына ҡәһүә эсеүселәрҙә бауыр циррозы булмай, ти Сингапур ғалимдары. Әлеге мәлдә бауыр цирозы донъялағы бөтөн үлемдәрҙең 1,3 процентының сәбәбе булып тора. АҠШ-ла ул 11-се урында тора. Тикшеренеүҙәр 15 йыл дауам иткән, унда 63 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. Ғалимдар ҡәһүә, алкоголь, ҡара һәм йәшел сәйҙәр, емеш һуттарының цирроз булдырыуға йоғонтон өйрәнгән. Иң ҙур хәүеф алкоголдән булып сыҡҡан. Ә көнөнә 2 сынаяҡ ҡәһүә эсеүселәр араһында был процент иң түбән. Әммә гепатит һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән циррозға ҡәһүә бер нисек тә йоғонто яһамай икән.

■ Британия ғалимдары ҡыҙыҡлы эксперимент үткәргән. Ир-егеттәргә төрлө ҡатын-ҡыҙҙарҙың фотоларын күрһәткәндәр һәм араларынан иң матурын һайлап алырға ҡушҡандар. Күптәр тән ауырлығы ҡабул ителгән норманан ауырыраҡ гүзәл заттарҙы һайлаған. Был матурлыҡ идеалдары артынан ҡыуып, үҙҙәрен аслыҡ менән яфалаған ҡатын-ҡыҙҙарға бер иҫкәртеү булып яңғыраһын ине, ти улар.

■ Британия ғалимдары билдәләүенсә, кибеттәрҙә һатылған һыуҙа микроорганизмдар санитар норманан 100 тапҡырға күберәк. Хатта крандан аҡҡан һыуҙа бактериялар әҙерәк икән. Әлбиттә, был бактериялар кеше сәләмәтлеге өсөн артыҡ зыян килтермәй, шулай ҙа иммунитетты түбәнәйтеп, төрлө ауырыуҙар башланыуы ихтималлығы бар. Сит илдә крандағы һыу юғары сифатлы, уны ҡайнатмайынса ла эсергә мөмкин. Беҙҙә иһә күптәр хәҙер эсәр һыуҙы һатып ала, тик пластик һауыттар ҙа һыуҙы токсиндар менән "байыта", тип белдерә белгестәр.

■ Әле күптән түгел генә хроник арыу синдромын уйлап сығарылған буш хәбәр, тип иҫәпләй инеләр. Һуңғараҡ психик тайпылыш тип һананылар. Бөгөн ғалимдар был ауырыу - физиологик тайпылыш һәм ул өлкәндәрҙә генә түгел, балаларҙа ла осрай, ти. Һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 16 йәштәге үҫмерҙәрҙең 2 проценты хроник арыу синдромы менән ярты йыл, тағы ла 3 проценты өс ай яфалана. Үҫмерҙәр араһында малайҙарға ҡарағанда ҡыҙҙар күберәк был диагнозға дусар була. Тикшеренеүҙәрҙә 5 756 бала һәм үҫмер ҡатнашҡан. Иң ҡурҡынысы, тип иҫәпләй ғалимдар, үҙенең проблемаһы менән белгескә мөрәжәғәт итеүселәр һаны бик аҙ.

■ Салат, ҡуҙғалаҡ һәм башҡа төрлө йәшел тәмләткестәр ябығырға ярҙам итә, ти Италия ғалимдары. Рационды бындай йәшелсәләр менән тулыландырыу организмды күбрәк клетчатка менән байыта, аппетитты көйләргә ярҙам итә. Сөнки уларҙың составындағы фолий кислотаһы һәм К витамины инсулин бүленеп сығыуҙы яйға һала. Клетчатка иһә эсәктәр өсөн "щетка", токсиндарҙы сығара, аш һеңдереүҙе тиҙләтә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# "ҠУЯН АТ, ҺЫРЛЫ САНА",

## йәки Сөннәтһеҙҙән кәңәш һорама...



### Ғәмәлдең фарызы

Сөннәт ғәмәле хаҡында ғилми, дини сығанаҡтарҙа төрлөсә аңлатмалар йөрөй. Йәһүдтәр өсөн, мәсәлән, ҡан төшөнсәһе йән тигәндә лә аңлата. Шуға күрә ғүмерҙе барлыҡҡа килтереүсе ағзаның тиресәһен ҡырҡҡан саҡта ҡан ағыҙыу кешене яралтҡан Аллаһы Тәғәләгә үҙ ғүмерен бағышлауға тиңләнә. Ислам дине буйынса, Ибраһим бәйғәмбәр Аллаһы Тәғәләнең талабы буйынса үҙ-үҙен, улы Исмәғилде һәм барлыҡ хеҙмәтселәрен сөннәтләй. Икенсе бер риүәйәт буйынса, Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәскәре изге яу мәлендә оҙаҡ ваҡытҡа дошман ҡамауында тороп ҡала. Эҫелә һыуһыҙ интеккән яугирҙарҙың енси ағзалары боҙола башлай. Бәйғәмбәр яугирҙарына үҙ-үҙҙәрен сөннәтләргә ҡуша һәм был юл менән улар һәләкәттән ҡотола. Мөхәммәт бәйғәмбәр игеҙәк ейәндәрен дә тыуыуҙарының етенсе көнөндә сөннәтләй. Мосолмандарҙың сөннәтлеләргә ингән өлөшө "суниттар" ("сөннәттәр"), сөннәтһеҙҙәре "шеиттар" ("шәһиттәр") тип атала.

Хәҙерге христиан динендә сөннәтләү юҡ, әммә Иисус Христосты ла (Ғайса бәйғәмбәрҙе) тыуыуының һигеҙенсе көнөндә сөннәтләгәндәр. Һуңынан христиан динендә иң күп реформа яһаусы Павел апостол сөннәтләүҙе суҡындырыу ғәмәле менән алмаштыра. Сөннәтләү XX быуаттың 70-се йылдарында Көнбайышҡа, атап әйткәндә, Америкала ла тарала. Ул саҡта яңы тыуған барлыҡ ир-аттарҙың 80 проценты сөннәтләнә. Ә Ер шарында бөгөн барлығы 60 процент көслө зат ағзаһы сөннәтле булып иҫәпләнә. Сөннәт мәсьәләһенә яҡыныраҡ килеп, уның кеше һаулығы өсөн файҙаһы, әһәмиәте хаҡында тәрәндәнерәк фекер йөрөтәйек әле.

### "Бабаға ултырҙыҡ..."

Ул көнгә тиклем сөннәтләнгән ағайҙарҙың ыштанһыҙ көйгә оҙон күлдәк кейеп, аяҡтарын кирә баҫып, ауыл урамында төлкән-төлкән атлап йөрөгәнен күреп, үҙҙәрен "баба-баба" тип үсекләп, көлә торғайныҡ. Әммә, көлә килә, артынан һөрә килә, тигәндәй, бер көн килеп, сират беҙгә лә етте. Йәй башының матур бер көнөндә "Ауылға баба килгән", тигән һүҙ таралғас, беҙҙең, 4-5 йәш араһындағы тиҫтерҙәрҙең, йөрәге жыу итеп ҡалды. Йылғырыраҡ, зирәгерәк малайҙар ауыл янындағы урманға ҡасып өлгөрҙө. Улар баба өйҙән-өйгә йөрөп, үҙ эшен бөтөргәндән һуң ғына, кислөтеп кенә өйҙәренә ҡайта алды. Ҡайһылары йыл һайын ауылға килгән бабанан ҡаса торғас, бөтөнләй сөннәтһеҙ тороп ҡалды. Бер нисә йылдан сөннәтсе бабаның үлеп ҡалыуы хаҡында ишеттек һәм беҙҙән һуң донъяға килгән бер нисә быуын малайҙары сөннәтһеҙ ҡалды, уның ни икәнен дә белмәй үҫте.

Ә беҙ эләктек. Һаман да иҫемдә. Баба тигән кешенең беҙҙең өйгә килеп ингәне, мине сәсемдән һыйпағаны, "Көҙ көнө улыма ҡуян ат, һырлы сана алып киләм, егеп йөрөрһөң", тип әйткәне. Бигерәк хикмәтле, серле, әкиәттәгесә тылсымлы ине шул бабаның "ҡуян ат, һырлы сана", тигәне. Уның "ҡуян ат" тигәнен аңланым да кеүек, ә бына "һырлы сана" тигәне нисегерәк икән? Шул хаҡта хыялланып та өлгөрмәнем... "сем" итеп ҡалды. Уның ҡарауы, "ҡуян ат, һырлы сана" хаҡындағы татлы хыял барыһынан да көслөрәк булып сыҡты. Һәр хәлдә, ул саҡтағы ауыртыныу татлы иҫтәлек кенә булып хәтергә уйылған. "Ҡуян ат, һырлы сана" тигәндең хикмәте лә тап ошондалыр, күрәһең. Тағы ла шуныһы иҫтә ҡалған: сөннәтсе баба енси ағзаны ҡырҡҡандан һуң хасил булған сей яраға сөрөк, йәғни серегән ағас онон һибә торғайны. Хәҙерге профессиональ медицина күҙлегенән ҡарағанда, сөрөк, бәлки, сәйерерәк тә, ҡырағайыраҡ та булып күренәләр, әммә беҙҙең ауылда, мәҫәлән, бер малайҙың да яраһы боҙолоп, ауырып йөрөгәне булманы.

Оҙон күлдәк кейеп, урам буйлап төлкән-төлкән баҫып, беҙ ҙә йөрөнөк, беҙҙән дә "баба-баба" тип көлдөләр. Тик үҫә килә, шуға ла иғтибар иттек: өлкәндәр, ниңәлер, сөннәткә ултыртылғандарға күп кенә яуаплы эштәрҙе ышанып тапшыра, ниңәлер сөннәтһеҙ кешегә ҡулы йыуылмаған кешегә ҡараған һымаҡ ҡарай. Сөннәтһеҙҙән икмәк телдермәйҙәр, мал салдырмайҙар, мәрхүмдәрҙе йыуыуҙан да мәхрүм сөннәтһеҙҙәр. Ниңәлер, уларҙың ҡулы менән башҡарылған ғәмәлде "хәрәм" тип баһалау йәшәй беҙҙең яҡта. "Сөннәтһеҙҙән кәңәш һорама!" тип тә әйтәләр хатта. Тағы ла, ниңәлер беҙҙә сөннәтләүҙе "бабаға ултырыу" тип атайҙар. Ниңә ултырыу икән? Йәһүдтәрҙә сөннәтләү "бритмила" тип атала икән. Уларҙа "Ысын ир 23 февраль көнө сөннәтләнергә тейеш", тигән әйтем дә бар. Фәнни телдә сөннәтләүҙе циркумцизия тиҙәр.

### Атайҙар донъяһына күсеү

Сөннәтләү дини йолаға ғына бәйле ғәмәлме? Хәҙерге заман медицина һәм психология фәндәре күптән инде был ғәмәлдең кеше һаулығы өсөн бихисап файҙалы яҡтарын иҫбат итте. Бөгөн сөннәтләү ҡайһы бер сирҙәргә ҡаршы дауалау сараһы ла булып тора. Уның гигиена йәһәтенән әһәмиәте лә баһалап бөткөһөҙ ҙур. Хәҙер дауаханаларҙа хирургтар ата-әсәләрҙең мөрәжәғәте буйынса малайҙарҙы "бабаға ултырта". Был операция бик еңел башҡарыла һәм "һырлы сана егелгән ҡуян ат"ҡа атланған малай шундуҡ өйөнә ҡайтарыла. "Бабаға ултырыу"ҙың хаҡы ла төрлө урында төрлөсә: бер меңдән өс меңгә тиклем, тиҙәр. Медиктар һәм психологтар фекеренсә, сөннәтләү бер нисә әһәмиәткә эйә:

1. Сөннәтләү енси акт оҙайлығын, тимәк, секс кинәнесен тәьмин итеүсе ғәмәл булып иҫәпләнә. Ни өсөн шулай тиһегеҙме? Сөнки енси ағзаның сөннәтләгәндән һуң асыҡ ҡалған баш өлөшө эске кейемгә ышҡылып йөрөп, уның һиҙгерлеген, тойоу һәләтен кәметә һәм был үҙ нәүбәтендә енси актты оҙайта.

2. Сөннәтләнгән һәм даими тәһәрәтләнгән ир-аттың енси ағзаһына инфекция һәм бысраҡ эләгеү ҡурҡынысы юҡ тиерлек.

3. Сөннәтһеҙ ир-аттарҙа "икенсе йөрәк сире" - енси биҙ ауырыуы (простатит, аденома) йышыраҡ осрай. Сөннәтһеҙ ир-ат сөннәтлеһенә ҡарағанда герпес, гонорея менән ике тапҡыр, сифилис, бәшмәк ауырыуы менән биш тапҡыр йышыраҡ ауырый.

4. Сөннәтләү ир-ат енси ағзаһының яман шеш менән сирләү ҡурҡынысын күпкә кәметә. Сөннәтле ир-аттарҙың ҡатындары аналыҡ юлы яман шеш сире менән һирәк ауырый. Бар ирҙәр ҙә сөннәтләнгән Сәғүд Ғәрәбстанында, мәсәлән, ҡыҙ-ҡатындар енси ағзаларҙың яман шеш ауырыуы менән бөтөнләй яфаланмай.

5. Ер шарындағы ирҙәрҙең яртыһынан күбеһе фимоз һәм парафимоз менән яфалана. Сөннәтләү был сирҙәрҙән арыныу өсөн иң ҡулай сара булып тора. Шулай уҡ тәндә бөүеле тотмаған ир-атҡа ла сөннәтләү ныҡ ярҙам итә.

6.Психологтар фекеренсә, сөннәтләнгән ир-аттарҙа ҡурҡыу синдромы аҙ була. Йәғни малай саҡта енси ағзаһының йоҡаҡ тиресәһе ҡырҡылған саҡта барлыҡҡа килгән ауыртыныу тойғоһо ир-ат өсөн, ғөмүмән, ауыртыныуға "сирҡаныс алыу" ғына икән дә.

7. Сөннәтләнгән ир-аттың енси ағзаһы эстетик йәһәттән дә оло әһәмиәткә эйә. Йолалар һәм традициялар нигеҙендә тәрбиәләнгән ир-ат өсөн сөннәт - күркәмлек билдәһе.

8. Австрия психоаналитигы Зигмунд Фрейд фекеренсә, "сөннәтләү үҫмерҙе бисексуаль хәләнән тиҙерәк сығарыу өсөн булышлыҡ итә". "Сөннәтләнгән малай, ир-ат атамаһы алып, әсәһе ҡуйынынан атайҙар донъяһына күсә", тиҙәр Көнсығыштың аҡыл эйәләре.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡуян атҡа һырлы саналар егеп йөрөүҙең ана ниндәй әһәмиәте бар икән дә. Хәҙер уйлап ҡараһаң, ауылыбыҙға килеп, малайҙарҙы сөннәтләп йөрөүсе бабаларҙың ниндәй мөһим һәм зарури ғәмәл башҡарып йөрөгәндәрен аңлайһың. Барыһы ла илдең һәм милләттең һаулығы өсөн булған. Малай саҡта бабанан урманға ҡасып китеп, сөннәтһеҙ ҡалған малайҙар хәҙер аңлайҙармы икән үҙҙәренең ниҙән мәхрүм булғанын? Әйткәндәй, беҙҙең яҡта бер ағай өйләнер алдынан "бабаға ултырҙы". Ҡуян ат егелгән һырлы санала ултырып елеүсе 4-5 йәшлек малайҙарҙы күҙ алдына килтерһәң, донъя яҡтырып китә, күңелдә мөғжизәле әкиәт ярала...**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# АТАЙ ӨЛГӨҺӨНӘ БЕР НИ ЕТМӘЙ!

**Быйылғы бурап яуған ҡар, өҫкә ауып барған буран тауҙары кешеләргә арыу ғына ҡамасау яһаны. Баш ҡаланың Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһы ихатаһын көрт баҫҡас, гимназия етәкселеге һәр синыфтан икешәр атайҙың ҡар өмәһенә килеүен һорап, ата-әсәләр советына мөрәжәғәт итте хатта. Билдәләнгән көндә, карантин ваҡытында, атайҙар йәһәт кенә йыйылып, мәктәптең тирә-ягын "һә" тигәнсе Ҡыш бабай ҡоршауынан азат итте.**



Гимназия директоры Илдар Азат улы Моталов әйтеүенсә, атайҙар йыл һайын гимназияға шулай ярҙамға килә. Хатта үҙҙәренең эш ҡоралдары менән килеүселәр ҙә бар. Был тәжрибәне хәҙер башҡа мәктәптәр ҙә отоп алған.

Сираттағы ҡар көрәү өмәһенә атайҙарҙың береһе үҙенең улын да алып килгәйне. Улар эргәһенән былай ғына үтеп китә алмайынса: "Һеҙ улығыҙҙы ла алып килгәнһегеҙ икән..." - тип, ҡолас ташлап эшләп йөрөгән асыҡ сырайлы ағайға һүҙ ҡуштым. Ул: "Эйе, улымды ла алып килдем, нисек ҡар көрәргә икәнен өйрәнһен", - тип йылмайып яуапланы. Өмә тигәнең бер сәғәт тирәһе дауам итте, атайҙар, эшен тамамлап, ҡайтыу яғына ҡуҙғалды. Баяғы аталы-уллы таныштарым ғына ҡайтырға уйламай ҙа, һаман ҡар таҙартыуын белә. "Беҙ башҡаларҙан һуңыраҡ килгәйнек бит, шуға бынау боролошҡа тиклем ҡарҙы көрәп бөтөрөп ҡайтайыҡ, тибеҙ", - тине лә атай кеше, ихласлап, минең менән әңгәмәгә ҡушылып китте.

Сығышы менән Мәсетле районы Әшәй ауылынан Зөфәр Зәкирйән улы Зиннуров икән. Өфөләге "Сәләмәт быуын" ("Здоровое поколение") клиникаһында теш табибы булып эшләй. Уның улы Заһир гимназияла 5-се класта белем ала.

- Мөмкинлек булғанда ялды, каникулды күберәк ауылда үткәрергә тырышабыҙ, - тип һөйләп китте Зөфәр ағай. - Атайым ейәндәренә лә хеҙмәт тәрбиәһе бирә. Беҙҙең үҙебеҙҙең хеҙмәт тәрбиәһе иртә башланды бит. Мин беренсе тапҡыр 12 йәшемдә бесән саптым... - Артабан әңгәмәсем үҙенең 1-се Башҡорт республика интернат-мәктәбендә белем алған йылдарын - ундағы хеҙмәт тәрбиәһенең яҡшы һөҙөмтә биреүен дә телгә алды. Һәм шуны өҫтәп ҡуйҙы: "1995 йылдан Өфөләмен. Өс йыл интернатта уҡыным. Үҙ милләттәшем - Гөлнара апайым менән ғаилә ҡорҙоҡ. Улыбыҙҙы ла, үҙебеҙҙең мөхиттә уҡыһын, тип, башҡорт мәктәбенә уҡырға бирҙек", - тине.

- Ата-әсәйеңә нисек ярҙам итәһең? - тип Заһирға өндәшкәс, ул ҡаҙаҡ ҡағыу, машинаны, уның тирә-яғын ҡарҙан таҙартыу, баластарҙың саңын һурҙырыу, сүп-сарҙы сығарып түгеү һымаҡ бурыстарын һанай башланы. - Әсәйгә ҡайһы берҙә картуф, һуған әрсешәм, - тип тә өҫтәне. Атай менән ул араһындағы дуҫлыҡ тураһында һүҙ сыҡҡас, бәләкәй әңгәмәсем: "Беҙ, ни, атай менән дуҫ ул. Мин эсерҙәремде уға ғына һөйләйем. Әсәйгә бик һөйләп бармайым", - тип тә аптыратты. Улының һүҙен Зөфәр Зәкирйән улы ла ҡеүәтләне һәм үҙенең дә атаһы менән ошондай уҡ мөнәсәбәттә булыуын, әсәһе менән бары тик эш, уҡыу тураһында ғына һөйләшер булыуын әйтеп үтте.

Заһирҙан: "Атайыңдан ҡурҡаһыңмы, әллә әсәйеңдәнме?" - тиеүемә, ул: "Береһенән дә ҡурҡмайым, икеһен дә яратам", - тип яуапланы. Атай кешенән: "Улығыҙ эш боҙһа, нимә эшләйһегеҙ?" - тип ҡыҙыҡһынғайным, ул көлөп: "Эш боҙһа ла, әллә ни әрләп бармайбыҙ, хәҙер бит балалар аҡыллы, беҙҙең һымаҡ түгел. Үҙебеҙҙе уйлайым да, атай-әсәйҙе йәлләп ҡуям. Беҙ бигерәк тиктормаҫ, шуҡ булғанбыҙ, мажараларға ла йыш тарығанбыҙ", - тине. Һәм хәҙерге заман балаларының ни өсөн улай аҡыллы булыуының серен дә төшөндөрҙө:

- Барыһы ла әлеге лә баяғы компьютер-телефондарға килеп ялғана. Беҙ бит кеше менән осрашыр өсөн мотлаҡ үҙебеҙ сығып йүгерә инек. Ятаҡҡа барып керһәң, эҙләгән кешеңдән тыш, башҡа таныштарыңды осратаһың, студент саҡта шуға төрлө мажараларға тарыйһың. Балалар телефондан ғына һөйләшә лә, теге оста: "Мин өйҙә юҡмын", - тиһәләр, тышҡа сығып та йөрөмәй. Уларҙы урамға сығарып ебәреүе лә ҡурҡыныс бит хәҙер. Шуға, бына шулай бергә-бергә йөрөргә, төрлө хәлдәрҙә үҙенә ниндәйҙер өлгө күрһәтергә тура килә инде...

**Иҙел РӘХИМОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Дүртенсе сер: аң проблемалары

Әлеге ваҡытта үҙегеҙ эшләй алғандың барыһын да башҡарғандан һуң ғына бәхетле һәм ҡәнәғәт булыуығыҙ менән килешкәнлегегеҙҙе аңлау бик мөһим. Әгәр шундай торошҡа етәһегеҙ икән, тирә-яҡтағыларҙың кире һәм насар фекерҙәре һеҙгә ҡағылмаҫ. Һәм, киреһенсә, әгәр башҡаларҙы ғәмәлдәре оҡшамай икән, сөнки, һеҙҙенсә, улар дөрөҫ эшләмәй йәки ғәҙел түгелдәр, һеҙ уларҙы ғәйепләмәйәсәкһегеҙ йәки үҙегеҙ алдында ғәйепле тойорға мәжбүр итмәйәсәкһегеҙ. Сөнки бер кем дә әле булған һөҙөмтәләрҙән яҡшыраҡҡа өлгәшә алмай.

*Һеҙ әлеге ваҡыттағы ысынбарлыкты ҡабул итергә һәм башҡа бер ниндәй ғәмәл дә мөмкин түгел икәнен аңларға өйрәнергә тейешһегеҙ.* Ысынбарлыҡ барыһы өсөн дә бер үк. Башҡа кешенән айырмағыҙ ошо ысынбарлыҡты нисек ҡабул итеүегеҙҙә генә. Төрлө булған кешеләрҙә бер төрлө аң, тәжрибә йәки тормош кисерештәре булмаған кеүек, тормошҡа ҡараштары, ҡиммәттәре, инаныуҙары, күҙаллауҙары һәм ынтылыштары ла бер төрлө түгел. Уларҙың һәр ҡайһыһының шәхси ысынбарлығы аҡыл, эмоциональ, физик характеристикаларҙан тора һәм уларҙы беҙ ошо аныҡ мәлдә үҙгәртә алмайбыҙ. Шулай итеп, шәхси ысынбарлыҡ әлеге ваҡыттағы ялған йәки дөрөҫ аң, ҡиммәттәр, инаныуҙар һәм күҙаллауҙар берлеген тәшкил итә. Ҡабул итеү һәр саҡ шартлы һәм аң менән матур төҫтәргә буяла. Әгәр аң яңылыша икән, ни тиклем хаҡлы булыуығыҙға ҡарамаҫтан, ҡабул итеү ҙә боҙола.

*Һәр ҡабул ителгән ҡарар һәм башҡарылған ғәмәл әлеге ваҡыттағы аң кимәленә нигеҙләнә.* Барлыҡ хис-тойғо һәм физик проблемаларҙың күп өлөшө үҙегеҙҙең һәм кешенең ысынбарлығы менән көрәш, йәғни хәл-торош эҙемтәһе булып тора. Уны һеҙ әлеге ваҡытта бик теләһәгеҙ ҙә үҙгәртә алмайһығыҙ. Һеҙҙең баш тартыуығыҙ йәки булғанды нисек бар, шулай ҡабул итергә теләмәүегеҙ проблема нигеҙендә ята ла инде. Әгәр үткәндәге һәм хәҙерге күңел ҡайтыуҙарын анализлап ҡараһағыҙ, уларҙың үҙгәртеп булмаҫлыҡ нәмәләргә ҡаршылыҡ күрһәтеүегеҙ һәм ҡаршы тороуығыҙ икәнлеген күрерһегеҙ.

Беҙ ысынбарлыҡҡа ҡаршылашабыҙ, сөнки уны үҙгәртә алырға һәләтлебеҙ, тигән хаталы һәм ялған ышаныс менән йәшәйбеҙ. Әммә тормош, беҙ бының менән ризамы, түгелме, әлеге ваҡытта ниндәй - ул шундай. Ҡаршы тороуҙы, ысынбарлыҡтың аныҡ осорон әлеге ваҡытта нисек бар шулай аңлы рәүештә ҡабул итеп кенә еңә алабыҙ. Үҙгәрештәр аҫҡысы - кешеләрҙе "ғәҙел юлға баҫтырырға тырышмай" ғына уларҙы ҡабул итә белеү. Һеҙ уларҙы, ни тиклем хаталы һәм яңылыш булып тойолмаһын, үҙҙәренең шәхси Аңы менән йәшәү хоҡуғында ҡалдырырға тейешһегеҙ. Быны өсөн тәүҙә үҙегеҙҙе яратырға һәм ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк. Әгәр үҙегеҙҙе тәнҡитләүҙе туҡтатмаһағыҙ, башҡаларҙы ла тәнҡитләүҙән тыйыла алмаясаҡһығыҙ һәм уларҙың ысынбарлығына һәм ошо мәлдәге Аң кимәленә ҡаршы сығасаҡһығыҙ. Үҙегеҙҙе ниндәй кимәлдә аңлайһығыҙ һәм хәлегеҙгә инәһегеҙ, башҡаларға ла шул дәрәжәлә генә шундай уҡ мөнәсәбәт күрһәтә алаһығыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

## НӘФСЕ

50. Күп кенә суфыйҙар нәфсенең дүрт кимәлен билдәләй.

Бойороҡ биреүсе нәфсе. Ул кешене яуызлыҡ ҡылырға ҡоторта. Ул - барлыҡ яуызлыҡтарҙың сығанағы, хайуан холоҡло, үҙенә туктауһыҙ маҡтау йырҙары сығара, һыйланырға, йоҡо һимертергә генә белә. Һәр саҡ теләктәрен бойомға ашырыу хаҡында ғына уйлай. Формаһы буйынса ул - кеше, йөкмәткеһе буйынса - Иблес. Бойороҡ биреүсе нәфсенең ун билдәһе бар: әҙәпһеҙлек, яуызлыҡ, дошмансылыҡ, яһиллыҡ, тәкәбберлек, күрә алмаусанлыҡ, көнсөллөк, ике йөҙлөлөк, ышанмаусанлыҡ, ҡомһоҙлоҡ.

Ғәйепләүсе нәфсе. Ул ҡырын эштәре өсөн үҙ-үҙенә яза биреүсе нәфсе. Суфыйсылыҡтың тәүге аҙымдарында, кешенең рухы һәм йөрәге уяна башлағанда шул яҡтылыҡта нәфсе үҙенең ҡырын эштәрен күрә һәм Аллаһы Тәғәлә алдында ярлыҡау һорай башлай. Ғәйепләүсе нәфсе бойороҡ биреүсе нәфсе менән тынысланған нәфсенең ҡап уртаһында тора. Ғәйепләүсе нәфсе - Аллаһы Тәғәләгә яһалған тәүге аҙым да ул. Уның ун билдәһе бар: дәрүишлек, намыҫлылыҡ, түҙемлек, тоғролоҡ, намаҙ уҡыуҙа даимилыҡ, хажға барыу, ғибәҙәт ҡылғанда ихласлыҡ, дини һалымдарҙы түләү, рухи һуғыш. Ғәйепләүсе нәфсене интеллектҡа ла тиңләйҙәр.

Илһамланған нәфсе. Аллаһы Тәғәләнән төшкән яҡтылыҡ нәфсене илһамландыра һәм ул изгелек менән яуызлыҡты айыра башлай. Уның ун билдәһе бар: аҡыл, зирәклек, белем, ихласлыҡ, илһам, уяныу, камиллыҡ, бөхтәлек, изгелек һәм йомартлыҡ.

Тынысланған нәфсе. Был саҡта нәфсе Аллаһы Тәғәлә хозурында тыныслыҡ таба. Аллаһы Тәғәләнән төшкән ҡояш иң юғары нөктәһенә барып еткән саҡта нәфсе тыныслана, барлыҡ кире сифаттарынан таҙарына. Тынысланған нәфсе кешенең йөрәгендә урын ала. Уның ун билдәһе бар: фәҡирлек, сабырлыҡ, ғәҙеллек, ғәҙел хөкөм итә белеү, ҡәнәғәтлек, белем, бойомға ашыу, үҙ-үҙенә ышаныусанлыҡ, намыҫ һәм тоғролоҡ. Тынысланған нәфсе йөрәк кимәленә барып етеп, рухҡа әүерелә.

**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# РӘМИ ҒАРИПОВ: "ИЛЕ ЮҠТЫҢ ҒЫНА ТЕЛЕ ЮҠ!"




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**5-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Мәргән. Беллетрист. Урам. Штурман. Ҡашмау. Уртаҡлыҡ. Еңел. Ҡаптырма. Аквариум. Ларылдаҡ. Амантай. Елғыуар. Илаҡ. Курсант. Беләҙек. Нәҡ. Кама. Әберсен. Ниәт. Осҡон. Һепертке. Ләм. Уйыл. Ҡамсы. Йылҡы. Ҡуян. Ҡыпыҡ. Ҡола. Арындырыу. Андыҙ. Ҡоҙа.
**Вертикаль буйынса:** Аҡса. Тәрбиәлелек. Амидол. Май. Алтын. Әкрен. Алҡа. Батша. Күн. Тауыҡ. Туҡал. Ыласын. Мелиоратор. Сулпы. Ҡондоҙ. Ареал. Гармун. Нахаҡ. Ылаҡ. Улаҡ. Һаҡал. Тамыр. Елкәлек. Урта. Аҙап. Режим. Ҡарлы. Ауырлыҡ. Уҙаман. Әтлек. Ҡамыр. Таяҡ. Елен.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (13) дүшәмбе | 6:56 | 8:26 | 13:30 | 17:04 | 18:34 | 20:04 |
| 23 (14) шишәмбе | 6:53 | 8:23 | 13:30 | 17:06 | 18:36 | 20:06 |
| 24 (15) шаршамбы | 6:51 | 8:21 | 13:30 | 17:08 | 18:38 | 20:08 |
| 25 (16) кесе йома | 6:49 | 8:19 | 13:30 | 17:10 | 18:40 | 20:10 |
| 26 (17) йома | 6:46 | 8:16 | 13:30 | 17:12 | 18:42 | 20:12 |
| 27 (18) шәмбе | 6:44 | 8:14 | 13:30 | 17:14 | 18:44 | 20:14 |
| 28 (19) йәкшәмбе | 6:42 | 8:12 | 13:30 | 17:16 | 18:46 | 20:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## АҒАС ТА УЛТЫРТ!

Әлеккеләр диндә лә сик-самаларҙы үтергә тырышмаған, донъяһын да онотмаған. Иң хөрмәтле, иң тәҡүә сәхәбәләрҙән булған бер шәйех Шам ерендә ағас ултыртып йөрөй. Шул саҡта уның эргәһенә берәү килеп: Эй, шәйех, Аллаһ илсеһенең иң яҡын дуҫтарынан була тороп, һин ағас ултыртыу кеүек юҡ-бар менән булышып йөрөйһөң", - ти. "Аллаһ илсеһенең мин: "Әгәр ҙә кем дә булһа берәү ағас ултыртып, бәндәләр һәм төрлө мәхлүктәр уның емешенән файҙалана алһа, был кешегә Аллаһ кемгәлер саҙаҡа биргәнден әжер-сауаптарын яҙып ҡуйыр", - тигән һүҙҙәрен беләм", - ти сәхәбә.

Әйткәндәй, үҫеп ултырған үҫемлектәргә ҡул һуҙыу, уларға зыян килтереү - язаға лайыҡлы гонаһ. Бабайҙар әйткән бит: "Үҫентеләрҙе ҡырҡып йөрөгән кеше баш ҡырҡып та йөрөй ала". Тағы ла улар шулай тигән: "Күңелендә иман булыуын теләгән кешенең ғәмәлендә лә игелек булырға тейеш".

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 февраль "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия
**21 февраль "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма
**23 февраль "Яңғыҙҙар ташы"** (Ә. Ғаязов), драма
**24 февраль "Ике төш"** (М. Багаев), драма
**26 февраль "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама

**Салауат башҡорт дәүләт драма театры гастролдәре**

**25 февраль "Эх, Өфө ҡыҙҙары"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия
**26 февраль "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), моңһоу комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 февраль "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия
**21, 23 февраль "Приключения обезьянки Бьянки"**, әкиәт. Башлана 12.00
**24 февраль "Как Колька двойку исправлял"**, әкиәт. Башлана 11.00, 13.00
**24 февраль "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**20 февраль "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миңнуллин), драма
**21 февраль "Великим огненным годам, святую память сохраняя... "**, концерт программаһы. Башлана 12.00
**23 февраль "Һатам! Иремде һатам!!!"** (Н. Ғәйетбаев), комедия
**25 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия
**26 февраль "Чума XXI века@zhizni.NET"** (В. Сигарев), драма

## КИНО ЙЫЛЫНЫҢ БЕР САРАҺЫ

**Өфөлә Николай Киселев исемендәге "Ҡул ҡыҫышыу" халыҡ-ара кинофорумы булып үтте һәм 15 февралдән 17-нә тиклем милләт-ара мөнәсәбәттәр тураһында иң яҡшы фильмдар баш ҡаланың "Родина" кинотеатрында бушлай күрһәтелде.**

Сара Башҡортостандың Благовещен районында тыуып үҫкән партизан Николай Киселевтың иҫтәлегенә арнала. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ул Долгиново ауылынан 218 йәһүдте фронт линияһы аша алып сыға. "Башҡорт Шиндлеры" иҫтәлегенә уҙғарылған кинофорумдың девизы - "Ҡул ҡыҫышыу - килешеүгә, татыулыҡҡа һәм берҙәмлеккә тәүге аҙым".

Сараның программаһына 10 документаль һәм һигеҙ уйын фильмдары ингәйне. Фильмдарҙы ҡарағандан һуң фекер алышыуҙар ойошторолдо. БРИКС ойошмаһы дәүләттәре - Ҡытай һәм Һиндостан фильмдарын күрһәтеү форумға халыҡ-ара статусын бирҙе. 2016 йылдың 15 февраленән Рәсәй БРИКС-та рәйеслек итеүен тамамланы һәм Өфө ойошманың киләһе саммитын үткәреү хоҡуғын Һиндостанға тапшырҙы. Шуға бәйле форумға һинд кино эшмәкәрҙәре саҡырылғайны.

ӘЙТӘГҮР!

# ИРҘӘР БАЙРАМЫ ҒЫНА ТҮГЕЛ...

**23 февраль - Ватан именлеген һаҡлаусыларҙы тәбрикләү, илһөйәрлек, батырлыҡ байрамы уңайынан гәзит уҡыусыларға ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**



**Нурғәле ҠАЙЫҠБИРҘИН, ҡурайсы, Сибай сәнғәт колледжының башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары бүлеге мөдире:** Был байрамды һуңғы мәлдә ир-егеттәр көнө тип бер аҙ ябайлаштырып ебәрҙеләр, тәү сиратта - ул Ватанды һаҡлаусылар көнө. Элегерәк әрмегә бармай ҡалған егетте ихтирам итмәнеләр, уға хатта ҡыҙҙар ҡарамай торғайны. Мин әрмегә йәштәштәремдән 3 йылға һуңлап барҙым. Өфө сәнғәт училищеһын тамамлап, Йылайырҙа ҡурай класы асып, яңы уҡыу йылынан балаларҙы ҡурайға өйрәтә башлағайным, ноябрҙә әрмегә саҡырыу килде. Мин башты ялтыратып ҡырҙырып, ҡурайҙарымды уҡыусыларға таратып биреп, военкоматҡа килһәм, быйылға бармай торабыҙ, тиҙәр. Баҡтиһәң, уҡырға йыйылған балалар менән эште тамамлаһын, тип, Ғата ағай Сөләймәнов һораған икән. Кире ҡайтырға тура килде. Киләһе йылына майҙа военкоматка тағы саҡырттылар. Тағы ҡалдырырға итҡәйнеләр, ныҡышып, кире ауылға ҡайтып та торманым, өҫтөмә кейеп барған костюм-салбарымда әрмегә киттем. Һәр егет үҙен әрмелә һынарға тейеш тип уйлайым, ныҡ тәрбиәләй ул кешене. Тормошта булған бар ваҡиғалар онотолоп бара, әммә әрме онотолмай. 40 йыллап ваҡыт үтте, бергә хеҙмәт иткән һәр егеттең, командирҙарҙың һәр береһенең исеме иҫтә. Шуныһы ҡыҙыҡ, ир-ат күберәк йыйылған урында һүҙ мотлаҡ әрмегә, унда булған ваҡиғаларҙы хәтерләүгә барып тоташа. Шуға ла йәштән үҙегеҙҙе әрме хеҙмәтенә әҙерләгеҙ, тип теләр инем йәштәргә. Спорт менән шөғөлләнегеҙ, насар ғәҙәттәрҙән арыу йөрөгөҙ. Илебеҙҙең киләсәге һеҙҙең ҡулдарҙа!



**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, яҙыусы:** Һәр бер халыҡтың дәүләтселек тәжрибәһенә эйә булыу-булмау һәләте хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәтендә тура-нан-тура сағылыш таба. Әйтәйек, 1812 йылда оло Ватаныбыҙға ҡурҡыныс янағанда халҡыбыҙ үҙ иҫәбенә 28 полктан торған ғәскәр төҙөп, шуны үҙ иҫәбенә яу аттары, эйәр-өпсөн, ризыҡ менән тәьмин итеп, яуға оҙата алған икән, бындай ғәмәл фәҡәт тик дәүләтселек тәжрибәһе булған халыҡҡа ғына мөмкин булған. Бөйөк Ватан һуғышында Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы төҙөү ҙә милләтебеҙҙең дәүләт тәжрибәһе сағылышы. Шуға күрә, хәҙерге заманда ла, ул ниндәй генә шарттарҙа йәшәгән әрме булмаһын, унда башҡорт ир-атының ҡатнашыуы - шулай уҡ дәүләт тәжрибәһе сағылышы. Биленә ҡайыш һалған егеттәребеҙ был тарихи хәҡиҡәтте аңларға бурыслы.

Башҡорт ир-егетенән азаматлыҡ киткәне юҡ, бөгөн дә уларҙың әрме хеҙмәтенә ыңғай мөнәсәбәттә булыуы - уларҙың дәүләт кимәлендә фекерләүен күрһәтә лә инде. Шулай ҙа был көндө ир-егеттәр байрамы тип әйтеү дөрөҫ түгел. Сөнки ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ватанды һаҡлаған, айырыуса тыл фронтында "һуғышҡан", был һуғыштың ил эсендәге, күренмәгән өлөшө. Ир-атҡа еңелерәк булған, сөнки ул күренгән өлөшөндә йөрөгән. Тимәк, һуғыштың иң ҙур ауырлығын ҡатын-ҡыҙ күтәргәс, был көн ир-аттар көнө генә була алмай. Ҡатын-ҡыҙҙың күренмәгән яуҙа йөрөүен халҡыбыҙҙың "Йәшерен яуҙы юҡҡа һанама" тигән әйтеме менән дә аңлатып була.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

## ПРЕМИЯ - ТАМАРАЛА!



**Мәскәүҙә Яҙыусыларҙың үҙәк йортонда иң яҡшы әҙәби тәржемә өсөн "Словес связующая нить" Бөтә Рәсәй әҙәби премияһы тапшырылды.**

2015 йылғы премияға донъя һәм рус әҙәбиәте классиктары әҫәрҙәрен башҡорт теленә ауҙарыу буйынса емешле эшмәкәрлеге өсөн башҡорт шағирәһе Тамара Ғәниева лайыҡ булды. Дипломға премия жюрийы рәйесе, Николай Лесков исемендәге православие яҙыусылары клубы идараһы рәйесе Игорь Смолькин ҡул ҡуйған.

Тамара Ғәниева ундан ашыу авторҙың әҫәрҙәрен тәржемә иткән. Улар араһында Фридрих Шиллерҙың "Мария Стюарт", Альбер Камюҙың "Калигула", Николай Гоголдең "Ревизор", Камил Йыһаншиндың "Алдан алтыны", "Росомаха" һәм башҡа китаптар бар. "Словес связующая нить" премияһы тәржемә өлкәһендә әҙәби ижадтың абруйын һәм әһәмиәтен арттырыу, яңы сағыу исемдәр асыу сараһы булараҡ булдырылған һәм Рәсәй, сит ил яҙыусыларының әҫәрҙәрен илебеҙ халыҡтары телдәренә тәржемә иткән өсөн тапшырыла.

## РӘМИҘЕ ЯРАТАБЫҘ!



**Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуған көнө уңайынан республика йәштәре интернетта флешмоб ойошторҙо. Унда ҡатнашырға теләгән һәр кем шағирҙың яратҡан шиғырын яттан һөйләп, видеоға төшөрөп, #РамиГарипову84 билдәһе менән "Бәйләнештә" селтәренә һалырға тейеш.**

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актеры Артур Кәбировтың был башланғысын БДУ-ның филология факультеты студенттары күтәреп алды. "Рәми Ғариповты бер ҡасан да күрмәгән йәштәрҙең уны яратыуына аптырайһы түгел. Рәми темаһы - мәңгелек. Үҙенең шиғырҙарында һүрәтләгән хистәр - мәңгелек. Шиғриәтенә илһөйәрлек тойғоһо, гражданлыҡ позицияһы, лирика хас, әммә барыһы ла уның тормошҡа сикһеҙ һөйөүен сағылдыра. Ошо флешмоб аша шағир үҙе тере булмаһа ла, уның хаҡында хәтерҙең тере булыуын һәм шиғырҙарын яратыуыбыҙҙы күрһәтергә теләнек", - тине флешмобты ойоштороусы, "Февраль. Буран" спектаклендә Рәми Ғарипов ролен уйнаған Артур Кәбиров.

Был Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа бағышланған беренсе генә акция түгел. Ике йыл рәттән "Минең Рәми" бөтә Рәсәй шиғри марафоны уҙғарылды һәм Салауат Юлаев исемендәге майҙанда марафон менән тамамланды. Социаль селтәрҙәрҙә шағирҙың ижадына арналған төркөмдәр бар.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БАЛА БАҠМАҠ...
### йән сыҡмаҡ

Айым тура баҡҡанда, йондоҙҙарға йөҙөроҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡылһыҙ көйө бәхетле булыуға ҡарағанда аҡыллы көйө бәхетһеҙ булыуың мең артыҡ.

**(Эпикур).**

Хоҙай Тәғәлә кемдең вазифаһын тартып ала, шуға ул аҡылын кире ҡайтара.

**(Пшекруй).**

Дуҫтар йәшәргә ярҙам итә, әммә эшләргә ҡамасаулай.

**(Тадеуш Котарбинский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше юл буйлап китеп бара. Уның артынан бер йәш тай эйәрә. Кеше ҡайҙа боролһа ла, тай уның артынан ҡалмай. Аптырағас, кеше уны өйөнә алып ҡайта. Тай шул тиклем матур була. "Күрәһең, таҙа тоҡомдандыр, тиреһен ҡанатып, эйәр һалырға ла йәл был", тип уйлай ир. Шунан тайҙы сәскә һәм төрлө таҫмалар менән биҙәй ҙә, етәкләп, урам буйлап йөрөтөргә алып сығып китә.**

**- Ҡайҙан алдың бындай матур тайҙы? - тип һорай осраған кешеләр.**

**- Был тай менән ер һөрөргә түгел, һыбай менеп йөрөргә лә йәл, - ти икенселәр.**

**Кеше уғата ғорурлана һәм башҡа көндәрҙә лә тайҙы етәкләп, кешеләр күҙен ҡыҙҙырып, урам буйлап йөрөтөүҙә дауам итә.**

**Бына яҙ етә, бар ауыл халҡы ер эштәренә тотона. Әлеге кешегә лә баҫыуға сығырға кәрәк тә бит, тик атын һабанға егергә ҡыймайыраҡ тора. Берҙән-бер көндө, тәүәккәлләп, атына дуға кейҙереп, һабанға екмәксе итһә, уныһы дулап китеп, донъяның аҫтын-өҫкә килтерә. Көскә тынысландырып ала уны хужа. Артабанғы көндәрҙә лә атына эйәр һала йә дуға кейҙерә алмай.**

**Шунан был ир атын аҙбарға индереп ҡуя ла, баҫыу эштәре өсөн кемдеңдер атын һорап торорға тип, ауыл буйлап сығып китә.**

**- Үҙеңдең атың бар бит, шуның менән ер һөр. Һәр кемдең аты үҙенә ҡәҙерле. Беҙ ҙә атыбыҙҙы сәскә менән биҙәп кенә йөрөтөр инек тә ул... - ти ауылдаштары.**

**Шунан хужа атын һатырға ҡарар итә. Ләкин үҙенең ауылында берәү ҙә уны һатып алырға теләмәй. Хужа атын күрше ауылға алып сығып китә, ләкин уның холоҡһоҙ аты тураһындағы хәбәрҙе бында ла ишетеп өлгөргәндәр булып сыға. Хужа оло хәсрәткә тала. Ауылдаштары ла уға ҡарап, йәлләп, баш сайҡай. Бына бер саҡ, өйөлөшөп, ошо хәл тураһында гәпләшеп торған бер төркөм ир-егеттәр янына аҡһаҡал килә һәм шулай ти:**

**- Һеҙ ул ирҙе йәлләмәгеҙ, ә уның ҡулына эләгеп, ҡурсаҡҡа әйләнгән атты йәлләгеҙ. Ҡурсаҡты уйнаталар-уйнаталар ҙа, кәрәге бөткәс, ташлайҙар..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 19 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 293/02